*✓һуҡыр - яҡты донъяны күрергә, һаңғырау - ишетергә, телһеҙ - һөйләшергә, түшәктә хәрәкәтһеҙ ятыусы аяҡтарына баҫырға хыяллана. Күреү, ишетеү, һөйләшеү, үҙ аяҡтарыңда йөрөү - донъяла миллионлаған кеше өлгәшергә теләгән бәхет ул. Ә һиндә бындай бәхет бар - Хоҙайға рәхмәтле булырға онотма!*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№16 (590)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йәш быуынға яҡын киләсәктә…
йөҙөн һаҡлау бәхете тейерме?
3

Ер аҫтында хазиналар
Уларға һуң кем хужа?
7

Башҡаларға юл яҡтыртып…
үҙем янам!
8-9

Яҙыусыларыбыҙ…
яңы рәйес һайланы
11

14 ТВ-программа










ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Беләбеҙ, Рәсәй почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡын саманан тыш юғары күтәреп ебәреүе беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерҙе. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары, аңлы уҡыусыларыбыҙ был ауырлыҡты ла аңлап ҡабул итер, тип ышанып ҡалабыҙ.**

• Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылырға кәрәк буласаҡ. Ләкин ошо хаҡтың яртыһынан аҙы - **246 һумы** ғына беҙҙең редакция билдәләгән хаҡ булыуын да белеп ҡуйығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойоштолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Апрелдә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**




УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# МАЯҠ КЕҮЕК УЛ…

**Бөгөнгө көндә донъя, ил буйынса көндәлек ваҡиғаларҙы еткереүсе матбуғат баҫмалары бихисап. Әммә сифатлы мәғлүмәт биреп кенә ҡалмай, тос фекерҙәр яңғыратыусы аналитик мәҡәләләре менән айырылып торған "Киске Өфө" гәзите башҡорт телендә донъя күргән гәзит-журналдар араһында иң ҡәҙерлеһе.**

Бөгөнгө буталсыҡ заманда, матди байлыҡ рухи ҡиммәттәрҙән өҫтөн ҡуйылған осорҙа, йәштәргә лә, ололарға ла ҡараңғылыҡты ярып, дөрөҫ юл күрһәтеүсе маяҡ кеүек ул "Киске Өфө" гәзите. Уның аша республикалағы хәл-ваҡиғалар тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр алабыҙ, милләтебеҙ зыялыларының актуаль проблемаларға, халыҡ күңелендә яралған ҡатмарлы һорауҙарға ҡарата яуабын ишетәбеҙ. Гәзит биттәрендә башҡорт халҡының үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге асыҡ сағылыш таба. "Киске Өфө"нө ҡараштырып ҡына сығып, йәки 10 минут эсендә генә уҡып бөтөү мөмкин түгел. Сөнки уны уйлап, фекер туплап, иғтибар менән уҡырға күнегелгән. Тиҙ генә күҙ йүгертеп сығып, ташлап ҡуйһаң, кәнфит эләкмәй ҡалған бала кеүек мәхрүм итеп тояһың үҙеңде.

Милли рух, аҡһаҡалдар аҡылы, зыялылар фекере, йәш быуынға тәрбиә өлгөләре, милли йолалар, тарихыбыҙ сағылдырылған гәзиттең һәр һүҙе ҡиммәтле, күңел танһығын ҡандырыусы шифалы һыу тамсыһы. Шуға күрә, милли мәнфәғәттәрҙе яҡлаусы, башҡортто рухландырыусы, замана афәттәренә бирешеп томаланған аңын асыусы берҙән-бер гәзитебеҙҙең 14-се бите лә, ТВ программаһы өсөн әрәм ителмәй, кәрәкле итеп файҙаланылһа ине, тигән тәҡдим индерһәм, моғайын, күптәр минең менән килешер. Телевидение программаһын материал юҡлыҡтан ғына баҫтырып тороусы гәзиттәр ҙә бихисап, уларҙы халыҡ шуның өсөн генә алдыра. Тик "Киске Өфө" гәзитенә уҡыусылар телевизор ҡарар өсөн яҙылмай, миненсә. "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәрҙәренә еңел булмаған осорҙа үҙ позицияларын юғалтмай, халыҡҡа тоғро хеҙмәт итеүҙә уңыштар, яңы үрҙәр теләйем!


**Рәмилә ЙӘНМЫРҘИНА,
БДУ уҡытыусыһы.**


**Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзитендә телевидение программаһын баҫтырыу кәрәкме, тигән һорау менән гәзит уҡыусыларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Бәлки, ысынлап та, был битте махсус тема, материалдар өсөн файҙаланырға кәрәктер? Гәзиттә ниндәй тема етерлек яҡтыртылмай? Нисек уйлайһығыҙ?**

***✓ Был хатты "Киске Өфө"гә һис икеләнеүһеҙ ебәреүемдең сәбәбе: тап һеҙҙең гәзит кенә үтеп киткән бәйгенең тамашасылар күрмәгән "шаршау арты" донъяһын аҙмы-күпме аса биреберәк ҡуйҙы.***



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ҺЫУ ИНЕҮ МИҘГЕЛЕ ЕТӘ...



**Тиҙҙән үҙенең түҙеп торғоһоҙ эҫе көндәре менән йәй етә. Йылға, күл буйҙары ял итеүселәр, һыу инеүселәр менән туласаҡ. Мин тәҡдим итәсәк аҡса эшләү юлы кеше күп йыйылған күл, йылға буйындағы пляж менән бәйле.**

Ғаилә, дуҫтар менән пляжға барғанда һәр кем үҙе менән бик әҙ әйбер алырға тырыша, сөнки кеше күп йыйылған урында улар юғалыу "һәләтенә" эйә. Шулай ҙа өй асҡысын, телефон, күҙлек һәм башҡа ваҡ, әммә мөһим нәмәләрҙе үҙең менән алырға тура килә. Шуға күрә, башҡалар рәхәтләнеп һыу ингәндә төркөмдән берәү әйберҙәрҙе һаҡлап ултырырға мәжбүр. Ә яңғыҙың ғына пляжға барыу тураһында уйларға ла ярамай: әйберһеҙ ҙә, кейемһеҙ ҙә тороп ҡалыуың бар.

Был ғәҙелһеҙлекте мин былай хәл итергә тәҡдим итәм: һәр пляжда, ҙур магазиндарҙағы кеүек, әйберҙәрҙе һаҡлау камералары ҡуйырға. Бәлки, берәйһе ошо эште юлға һалыр һәм аҡса эшләр. Мин ҡалала йәшәһәм, мотлаҡ шул эшкә тотонор инем, ләкин тормошом, эшем ауыл менән бәйле. Бәләкәй ячейкаларҙан торған бер һаҡлау камераһын яҡынса 15-20 мең һумға (ячейка һанына ҡарап) һатып алырға мөмкин. Был суммаға пляжда ҡуртымға алған ер өсөн һәм, әгәр ҙә нөктәлә үҙегеҙ тормаһағыҙ, хеҙмәткәрҙәргә түләнгән эш хаҡын ҡушырға кәрәк. Шулай итеп, эште башлап ебәреү өсөн 50 мең һум тирәһе башланғыс капитал кәрәк буласаҡ. Урлашыуҙар, әйбер юғалтыуҙар булмаһа, пляждағы хеҙмәтләндереү кимәле юғары күтәрелә. Быны аңлаған пляж "хужалары" ҡуртым хаҡын ул ҡәҙәре юғары күтәрмәҫкә лә мөмкин. Шулай уҡ был хеҙмәтте, ҡала пляждарынан тыш, ял йорттары һәм пансионат директорҙарына ла тәҡдим итергә мөмкин.

Эшмәкәрлек килем килтерһен өсөн реклама көслө булырға тейеш. Пляжға ингән урындарҙа әйберҙәрҙе һаҡлау хеҙмәте эшләүен белдергән плакаттар яҙып элергә мөмкин. Шулай уҡ ваҡыты-ваҡыты менән репродуктор аша мәғлүмәт биреү ҙә һөҙөмтәле буласаҡ. Бер тапҡыр һаҡлау камераһы менән ҡулланған һәм ҡәнәғәт ҡалған кеше тағы ла мөрәжәғәт итәсәк һәм дуҫтары, яҡындарына ла ошо хеҙмәтте тәҡдим итәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәй көнө генә шөғөлләнергә мөмкин булған эшмәкәрлек был, әлбиттә. Шулай ҙа йәйҙең оҙон көндәрендә һыу инеүселәрҙең күп булыуы арыу ғына килем килтерәсәк, тип уйлайым. Тәүәккәлләп эш башлаусылар булһа, уңыш теләйем.**

**Әнүр ӘМИНЕВ.**
**Әбйәлил районы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠ ЙӨРӘГЕНӘ...

## еңел сығыштар барып етмәй

**Рәмил ЙӘНБӘК, шағир:** Ысынлапта, һәр хәл иткес дәүерҙә, һәр киҫкен мәлдә, ил ағалары менән бер ҡатарҙан, майҙанға зыялылар, йәғни сәсәндәр сыҡҡан. Халҡыбыҙҙың оҙайлы һәм ҡаһарман тарихында быға миҫалдар бихисап: Айҙар Байыҡ сәсән, Аҡмулла, Бабич һ.б. Хәҙерге заманда зыялыларҙың роле ниҙә һуң, улар бөгөн бармы? Уҙған быуаттың 90-сы йылдар башында замандаштарыбыҙ араһынан байтаҡ әйҙәүселәр күтәрелеп сыҡты. Улар, һәр төрлө йәмәғәт ойошмалары, фирҡәләр төҙөп, башҡорт халҡын бергә, берҙәм көс итеп тупларға ынтылды. Шул рәүешле беҙ, үҙебеҙсә, республикабыҙға сағыштырмаса үҙаллылыҡ, суверенитет яулап алғайныҡ. Ул шәхестәребеҙҙең исемдәрен атап тороу кәрәкмәҫ, бөгөн бит "патриот" урынына "милләтсе" һүҙен ҡулланырға ғына торалар.

Бөгөнгө осорҙа зыялылар халыҡҡа ниҙәр әйтә ала һәм ниҙәр әйтергә тейеш икән? Бөтәбеҙгә лә аныҡ билдәле: суверенитет ҡағыҙҙа ғына ҡалған саҡта, ни тиклем генә әрнеүле булмаһын, кешеләрҙе яңынан көрәшкә саҡырыуҙан, урамдарға сығырға өндәүҙән фәтеүә юҡ. Үҙәк бөтә хоҡуҡтарыбыҙҙы алып бөттө, башҡорт мәктәптәре күпләп ябылды, ауылдарыбыҙ саҡ-саҡ тын алып йәшәй - бындай дәүерҙә нимәләр һөйләргә, нимәгә өндәргә мөмкин? Уйымса, халҡыбыҙҙы берләшергә, төп мәсьәләләрҙе кәңәшләшеп эшләргә саҡырырға кәрәк. Бының өсөн уртаҡ идея, дөйөм бер ойошма булдырыу зарур. Элегерәк йәмәғәт ойошмалары, фирҡәләр төҙөлдө ул, ләкин байтағы тарҡалды, бер килкеһе онотолоп бөттө. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ғына әҙме-күпме эш башҡарып йәшәп килә. Тимәк, уның эшмәкәрлеген йәнләндерергә, уға йән өрөргә кәрәктер. Ә төрлө ойошмаларҙың күплеге беҙҙең халыҡты тағы ла нығыраҡ тарҡата, минеңсә.

Тағы ла шунығы: мин "Ерҙе һаҡлайыҡ, ерҙе һатмайыҡ!" тигән һүҙҙәргә аптыраңҡырап ҡарайым: быны нисек эшләргә һуң? Мин ерҙе һаҡлауҙың юлын белмәйем. Объектив күҙлектән, юридик яҡтан сығып ҡарағанда, ергә беҙ хужамы? Бындай хистәрҙе, моғайын, башҡа милләттәштәрем дә кисерәләр. Шуға ла зыялыларыбыҙҙың аныҡ ҡына фекерҙәре, аныҡ ҡына тәҡдимдәре ишетелмәйҙер. Ә инде хис-тойғоға ҡоролған, нигеҙһеҙ сығыштар халҡыбыҙҙың йөрәгенә барып етмәй.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# БӘЙГЕ ҮТТЕ, ХӘТЕР ҠАЛДЫ...

**"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2014" республика конкурсы мәлендә бергә-бергә сәмләнеп, дәртләнеп көс һынашҡан бер нисә коллегам менән ныҡлап танышып, аралашып киттек, көн дә телефондан һөйләшеп торабыҙ. Әлбиттә, бәйге тураһындағы хәбәр әле булһа телебеҙҙән төшмәй.**

Республикабыҙҙың төрлө төбәктәренең генә түгел, хатта сит өлкәләрҙең иң оҫта уҡытыусыларын үҙенә йыйған һөнәри бәйгебеҙ тураһында барлыҡ гәзиттәр ҙә яҙып сыҡты, радио-телевидение ла ситтә ҡалманы. "Ашаған белмәй, тураған белә" тигән әйтемгә таянып, ошо бәйгенең уртаһында ҡайнап йөрөүселәрҙең береһе булараҡ, мин дә үҙ фекеремде яҙып ебәрергә булдым әле. Был хатты "Киске Өфө"гә һис икеләнеүһеҙ ебәреүемдең сәбәбе: тап һеҙҙең гәзит кенә үтеп киткән бәйгенең тамашасылар күрмәгән "шаршау арты" донъяһын аҙмы-күпме аса биреберәк ҡуйҙы. Тап һеҙҙең гәзиттә Ишембай ҡалаһынан Рифат Әйүповтың бәйгегә ҡарата үҙенсәлекле фекерҙәре сағылдырылды. Үпкәләштән булмаһын, башҡа гәзиттәрҙә баҫылған мәҡәләләрҙә бәйгенең фанфара тауыштары ғына яңғырап торғандай...

Шулай итеп, бәйгенең беренсе көнө. Сәхнәгә 55 уҡытыусы, бөтәбеҙ ҙә ҡатын-ҡыҙ затынан, күтәреләбеҙ. Беҙгә матур-матур бүләктәр һәм "XIX төбәк-ара конкурста ҡатнашыусылар" тип исемләнгән брошюра тапшырыла. Брошюраның 5-се пунктында төбәк-ара конкурстың II этабы тураһында бәйән ителгән. Ул өс турҙан тора: инновацион эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу, "Оҫталыҡ дәресе" һәм "Асыҡ лекция", иң аҙаҡҡы конкурс - "Әңгәмә-бәхәс". Ошо өс турҙың йомғаҡтары буйынса конкурстың финалистары билдәләнә, тигән аңлатма бирелгән.

Конкурс шарттары буйынса I турҙа 55 уҡытыусы ла ҡатнашты һәм талапсан жюриҙың ҡаты иләге аша үткән 20 конкурсант ҡына II турға сыҡты. Үҙем аралашып йөрөгән бик күп һөнәрҙәштәремдең фекере буйынса, тап ошо тур иң ауыры һәм көсөргәнешлеһе булғандыр ул. Ни өсөн тигәндә, был көндә төшкә тиклем "Оҫталыҡ дәресе"н бөтә зал алдында күрһәтеп, нервы көсөргәнешенең сигенә еткән бәйгеселәр төнгө 23 сәғәттә генә "Асыҡ лекция"ға тәҡдим ителгән темалар менән таныштыы. Шәхсән үҙем төнгө сәғәт 12-лә өҫтәл артына ултырғайным, таңғы 4-се яртыла сығышымды әҙерләп бөттөм. Аҙаҡ беленеүенсә, берәү ҙә был төндә йоҡламаған булып сыҡты...

Төн көнгә ялғанып, бәйге ҡыҙғандан-ҡыҙа барып, III турға килеп еттек. Был турға үтеүсе 10 конкурсант араһында минең дә фамилиям булыуы уғата шатлыҡлы

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан делегацияһының Ҡырымға рәсми визиты барышында Ҡырым менән Башҡортостан араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөләсәк. Ул яҡынса 23 апрелгә билдәләнгән. Был хаҡта БР Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышында хәбәр итте. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанға Ҡырымдың Белогорск районына комплекслы ярҙам күрһәтеү ҡушылған. Был масштаблы эште ойоштороуға яуаплы итеп беренсе вице-премьер Рәүеф Ноғоманов тәғәйенләнгән.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, Ҡырым Республикаһының Белогорск районында хәл ябайҙан түгел. Торлаҡ фонды, коммуналь, инженер инфраструктуралары туҙған. Белем биреү һәм һаулыҡ һаҡлау учреждениелары насар торошта. Белогорск - Ҡырымдың берҙән-бер газ үтмәгән районы. Районда күпселек йорттарҙа, шул иҫәптән күп фатирлыларҙа, үҙәкләштерелгән йылылыҡ та, эҫе һыу ҙа юҡ. Башҡортостан Президенты иҫәпләүенсә, тәү сиратта Белогорск районының коммуналь хужалыҡ һәм социаль өлкә объекттарын ғәҙәти хәлгә килтерергә кәрәк.

✓Был аҙнала Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһында Марокко Короле Ғәли йәнәптәренең Илсеһе Әбделҡәдир Лешехеб етәкселегендәге Марокко Короллегенең рәсми делегацияһы менән осрашты. Рөстәм Хәмитов хөрмәтле ҡунаҡты республиканың төп иҡтисади күрһәткестәре менән таныштырҙы, инвесторҙарҙы йәлеп итеү буйынса ҙур программаны тормошҡа ашырыу тураһында һөйләне. Былтыр Башҡортостан менән Марокко араһында тауар әйләнеше 2012 йыл менән сағыштырмаса ете тапҡырға артып, 130 миллион долларға еткән.

✓Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йортоноң директоры итеп Азат Ибраһимов тәғәйенләнде. Азат Ибраһимов 1959 йылдың 13 июлендә Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлаған. 1996-1997 йылдарҙа БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт министры ярҙамсыһы булып эшләй. Был вазифаға тәғәйенләнгәнсе Азат Ибраһимов БР Дәүләт китап палатаһында (Матбуғат архивы) директор вазифаһын башҡарҙы.

✓Башҡортостан Арбитраж судының яңы бинаһы федераль бюджетҡа 1, 67 миллиард һумға барып баҫасаҡ. Судтың 70 судья һәм 340 хеҙмәткәргә иҫәпләнгән яңы бинаһы Өфөнөң Киров районында, Әхмәтзәки Вәлиди - Аксаков - Пушкин - Гоголь урамдары кварталында урынлашасаҡ һәм һигеҙ ҡатлы буласаҡ.

***✓ Донъя халыҡтарын өгөтләү, ҡурҡытыу менән дә, сәйәсәте менән дә үҙ ихтыярына буйһондороп, үҙ йәшәү рәүешенә күндереп маташҡан АҠШ 1945 йылдан бирле 300-ҙән ашыу тапҡыр яҡын һәм алыҫ күршеләренә һөжүм итте.***



*УЯН, УЙЛАН...*

**Байлыҡ, аҡса йоғонтоһондағы донъяла берәүҙәрҙең икенселәрҙе үҙ ихтыярына буйһондороуын аҡлаған сәйәсәт еңде һәм илдә халыҡтың шул сифатта йәшәү рәүешен раҫланы. Һөҙөмтәлә, күптәр йәшәү мәғәнәһе һәм маҡсаты тигән төшөнсәләрҙән ваз кисте, тормошонда ниндәйҙер уңыштарға (бәхет тураһында һүҙ ҙә юҡ!) өлгәшеүҙән төңөлдө. 2011 йылда Рәсәй халҡы кәмеү темптары һәм ярлыҡылдары һаны буйынса донъяла 1-се урынға сыҡты! Күптәр үҙҙәренең тәне менән генә түгел, аңы менән идара итеү һәләтен юғалтып, йәки башҡаларға тапшырып, дөрөҫтө ялғандан, яҡшыны ямандан айыра алмай, үҙҙәрен талаған, көсләгән, кәмһеткәндәргә тоғро хеҙмәт итергә күнде.**

# ЙӘШ БЫУЫНҒА ЯҠЫН КИЛӘСӘКТӘ...

## йөҙөн һаҡлау бәхете тейерме?



Йәмғиәтебеҙ матди, сәйәси, хәрби өҫтөнлөктәрен юғалтып, ситтәр йоғонтоһона бирелеп, рухи байлыҡтарын юғалта, тәбиғи ресурстарын, халыҡ милкен аяуһыҙ талауға юл асып, феодаль йәмғиәткә күсә бара кеүек. Күрше туғандаш халыҡтарҙы эргәһенә туплап, Евразияла үҙе лидер булаһы урынға, илебеҙ сит илдәр сәнәғәтен үҫтереүсе сеймал базаһына әүерелде, тәбиғи булмышына, асылына ят йәшәү рәүешен үҙләштерә, йәш быуынға аҙғын идеяларҙы көсләп һеңдереүгә түҙеп ҡарай... Рәсәйҙе ҡыҫырыҡлаусылар, илдең сәйәсәтен, халҡының йәшәү рәүешен үҙҙәренең ҡалыбына һалыу менән бер рәттән, рухиәтенән, тарихынан ваз кистерергә, тәбиғи ресурстарынан яҙҙырырға тырыша. Был юҫыҡта ил хөкүмәте лә үҙен ҡуралмаусыларҙың тирмәненә һыу ҡоя. Мәҫәлән, туҡтауһыҙ реформалар һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә, 1990 йыл менән сағыштырғанда, уҡыусылар һаны 42 процентҡа, уҡытыусылар һаны 30 процентҡа кәмегән. 2012 уҡыу йылы башына 20300 мәктәп, 22000 балалар баҡсаһы ябылған. Бөгөн Рәсәйҙә 2 млн. үҫмер - наҙан, 700 мең бала етем. Һуңғы 20 йылда Ер йөҙөндә рус телен белеүселәр 350 миллиондан 278 миллионғаса кәмегән. Төрлө тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, 2025 йылда был һандың 150 миллионға тиклем кәмеүе күҙаллана. Был хәл Рәсәй халҡын мәғлүмәтлелектә 120 йылға артҡа ташлаясаҡ, тигән фараз бар.

Әбит донъяла халыҡ милке менән халыҡ файҙаһына идара итеү өлгөләре лә бар. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең сәйәси, иҡтисади һәм социаль яҡтан йылдам үҫеше күптәрҙе аптырата һәм һоҡландыра. Улар берҙән-бер байлыҡтары - нефть запасы тағы ла 20-25 йылға ғына етерен белә һәм нефтедолларҙарҙа алынған табышты байҙары сит илдәрҙә аҙып-туҙып йөрөһөн өсөн түгел, ә сәнәғәт тармаҡтарын үҫтереүгә, торлаҡ йорттар, юлдар һ.б. халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүсе объекттар төҙөүгә ҡуллана, һөҙөмтәлә, нефттән алынған табыш күләме кәмегәндә лә, ил халҡы үҙаллы һәм лайыҡлы йәшәһен өсөн шарттар тыуҙырыла, киләсәк быуындың яҙмышы хәстәрләнә. Илдә бер кемдән дә бер ниндәй ҙә һалым түләтелмәй. Граждандары тураһында кеше тыумаҫ элек үк ҡайғырта башлайҙар һәм ул хәстәрлек уның ғүмере буйына дауам итә. Мәҫәлән, һәр йәш ғаиләнең никах туйына 100 мең доллар аҡса һәм бушлай фатир бүләк ителә, һәр яңы тыуған балаға 20 мең доллар күләмендә ярҙам күрһәтелә. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының рәсми мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, иҡтисад һәм социаль үҫеш буйынса иң алдынғы илдәр рәтендә 14-се урынды биләй (Рәсәй - 97-се урында!)

Сүллек араһындағы ҡомлоташлы ундырышһыҙ ерҙәрҙе һыуһығарғыстар менән һуғарып сәскә аттырыуҙың, бай, уңышлы илгә әйләндереүҙең сере - ил сәйәсәтенең һәм халыҡ инаныуының ислам диненә һәм берҙәмлек идеяларына тоғро булыуында, тип ышаныслы әйтеп була. Дини тәғлимәттәргә таянып йәшәгән халыҡ тәртипле, тәүфиҡлы, ғәҙел тормош рәүеше алып барыуы арҡаһында бәхетле лә, бөйөк тә булыуға лайыҡлы!

Төрлө-төрлө ер аҫты хазиналарына, ер өҫтө байлыҡтарына эйә, сикһеҙ ундырышлы ерҙәре, урмандары, иҫәп-хисапһыҙ йылға, быуа, күлдәре булған илебеҙҙе Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре кимәленә күтәреп йәшәргә беҙгә бер кем дә, бер нәмә лә ҡамасауламай. Был маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн бөтә уңайлыҡтар ҙа, мөмкинлектәр ҙә бар, тик иман, ихтыяр көсө, теләк кенә кәрәк, биллаһи! Теләге барҙың иле лә, теле лә, етеш тормошо ла, өмөтлө киләсәге лә бар!

"Аллаһ биргән байлыҡты һәр кем үҙ белдеге менән, үҙ файҙаһына ҡуллана башлаһа, тормошта, тәбиғәттә һәм бәндәләр күңелендә лә тарҡалыу башлана", тиелә "Әш-Шүғәрә" сүрәһендә. Шуның һымаҡ, тормошо матди ҡиммәттәр туплауға, байлыҡҡа табыныуға һәм ҡомһоҙлоҡҡа ҡоролған йәмғиәттә ғәҙелһеҙлеккә юл асыла, татыулыҡ, тыныслыҡ юҡҡа сыға, әхлаҡи ҡанундарҙы, рухи ҡиммәттәрҙе тәкәбберлек, көнсөллөк, нәфсе алмаштыра. Был фекерҙе дәлилләү өсөн бер генә миҫал килтереү ҙә етә: донъя халыҡтарын өгөтләү, ҡурҡытыу менән дә, сәйәсәте менән дә үҙ ихтыярына буйһондороп, үҙ йәшәү рәүешенә күндереп маташҡан АҠШ 1945 йылдан бирле үҙ мәнфәғәттәрен яҡлап, 300-ҙән ашыу тапҡыр яҡын һәм алыҫ күршеләренә һөжүм итте, 200-ҙән ашыу тапҡыр аҫтыртын һәм асыҡтан-асыҡ рәүештә бойондороҡһоҙ илдәрҙең лигитим хөкүмәтен ауҙарырға маташты. Бәлки, ошо һандар уйланырға мәжбүр итер өҙлөкһөҙ үҙгәртеү, реформалар менән мауығыусыларҙы...

Хакимдарыбыҙ туҡтауһыҙ тәжрибәләр үткәреп, илде, халыҡты тарҡатыу урынына, Ватанының именлеген, халҡының берҙәмлеген һәм лайыҡлы йәшәүен хәстәрләп, күберәк ышаныслы киләсәген тәьмин итеүҙе күҙ уңында тотһа, халыҡтар телдәре өсөн дә, илдәре өсөн дә, киләсәге өсөн дә хәүефләнмәй, донъяларын төҙөкләндереү, тормоштарын камиллаштырыу менән булышырҙар ине... Килер заман, көслө ихтыярлылар үҙ асылын, үҙ йөҙҙәрен һаҡлап, һый- хөрмәттә һәм оло ихтирамда донъяға хужа булып йәшәр. Ә башҡалар? Башҡалар - көслө ихтыярлыларҙың хеҙмәтселәре булып, уларҙың берҙәмлегенә һоҡланып, уларға оҡшарға тырышып, көнләшеп һәм үсләшеп...

*...Борсой мине уйҙар.*
*Хәтәр уйҙар.*
*Уйланмаҫ та инем, көймәһәм.*
*Тел болғауҙар*
*хәүефлеген түгел,*
*Күҙ буяуҙар хаҡын күрмәһәм.*
*Борон башҡорт башына*
*ҡамсат бүркен*
*Тәкәбберлек*
*ҡылып кеймәгән.*
*Үҙ мөлкәте өсөн*
*йәнен биргән,*
*Ят милкенә ҡулы теймәгән.*
*Йәш быуынға яҡын киләсәктә*
*Йөҙөн һаҡлау бәхете*
*тейерме?*
*Йә башына үзбәк түбәтәйе,*
*Йәһүд кипаһы ла кейерме?..*

**Урал МОСТАФИН.**

---

ине. "Тыуған йорттоң стеналары ла көс бирә" тигән һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә ысынлап инандым: Салауат ҡалаһының барлыҡ халҡы һәр төрлө сайттарҙа ла, шәхси рәүештә лә дәртләндереп, минә рухи көс һәм дәрт биреп торҙо. Мин дә тыуған ҡаламдың ышанысын аҡларға тырыштым: ошо өс турҙа асыҡ тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса (һәр беребеҙҙең шәхси һөҙөмтәләре көн дә стендта яҙыла барҙы) өсөнсө урында бара инем.

Бына бәйгенең һуңғы көнө. Фанфаралар яңғырай һәм финалға сығыусылар иғлан ителә. Жюри составындағы бер ағай: "Финалға сығыу-сығарыу бер сәйәсәт кенә бит ул. Көтөлмәгәнсәрәк килеп сыҡһа, аптырамағыҙ ҙа, ҡайғырмағыҙ ҙа", - тип, барыбыҙҙы ла алдан уҡ йыуатып ҡуйғас, бик аптырашманыҡ инде.

Был хатты яҙыуымдың төп сәбәбе бына нимәлә: тәүге көндө үк төшөп ҡалып, ауылдарына ҡайтып, дүртенсе көндә генә кире килгәндәр ҙә номинацияла еңеүсе булып сыҡты! Һуңғы турға барып еткән, ләкин финалға үтмәүселәр ҙә шул уҡ номинацияла еңеүсе! Быны нисек аңларға? Хатта спортта ла бит I турҙан төшөп ҡалған командалар йәки спортсылар кире килеп, ҡыҫылып, бер баҫҡыста тормай. Ярымфиналға сығыусыларҙы айырым билдәләп, сәхнәгә сығарып баҫтырырға тейештәр ине, минеңсә. Улайһа, нимә тип беҙ шул тиклем һынауҙарҙы үтеп, аҙаҡҡаса көрәштек? Рустар әйтмешләй, "Каждой сестричке по сережке" принцибындағы тигеҙләү аңлашылманы шулай ҙа...

Бәйгеләр булып торор, үҙ һөнәренә тоғро ҡалып, намыҫ менән эшләгән уҡытыусыларға тормош үҙе ысын баһаһын ҡуйыр, тигән ышаныста ҡалам.

**Сәүиә БИКМӨХӘМӘТОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда милли колоритлы рестарандар һәм кафелар ойоштороу буйынса эштәр башланды. Баш ҡалала 2015 йылда уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС саммиттары алдынан башҡорт милли ризыҡтары тәҡдим итәсәк туҡланыу урындарын ойоштороу менән әле үк әүҙем шөғөлләнәләр. Мәҫәлән, Крупская урамында милли башҡорт кухняһы үҙ ишектәрен асты. Шулай уҡ баш ҡаланың башҡа рестарандарында ла менюға башҡорт ризыҡтарын индереү эше алып барыла. Яңы рестарандар асыу ҙа күҙаллана. Өфөлә 10 ресторан асырға планлаштыралар. Улар әлеге ваҡытта Өфөлә төҙөлә башлаған ҡунаҡханалар ҡарамағында буласаҡ.

✓22 апрелдә Башҡортостан Республикаһында Рәсәй Федерацияһы Президентының ҡабул итеү бүлмәһендә БР Эшҡыуарҙар хоҡуғы буйынса вәкил Рафаил Ғибәҙуллин эшҡыуарҙарҙың законлы хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлау мәсьәләләре буйынса граждандарҙы ҡабул итәсәк. Ҡабул итеү бүлмәһенең адресы: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 100. Тулыраҡ мәғлүмәт 251-64-39, 251-77-91 телефондары буйынса. Сара көндөҙгө икелә башлана.

✓РФ Мәғариф һәм фән министрлығында 2014/2015 уҡыу йылына балалар баҡсаларына, мәктәптәргә, уртаса махсус белем биреү йорттарына, вуздарға ҡабул итеү кампанияһы һораўҙары буйынса "ҡыҙыу линия" эшләй башланы. "Ҡыҙыу линия"ның эше 1 октябргә тиклем дауам итәсәк. Ведомствоның сайтында хәбәр ителеүенсә, эш көндәрендә 9 сәғәттән алып 16 сәғәткә тиклем (495) 539-55-20 телефондарына шылтыратырға мөмкин.

✓Башҡортостанға күптән көтөлгән йылы һауа торошо килде. Аҙнаның тәүге өс көнөндә республикала көндөҙ һауа температураһы плюс 6-10 градус тәшкил итәсәк, төндә - плюс берҙән минус өс градусҡа тиклем.Алдағы көндәрҙә һауа температураһы артасаҡ ҡына һәм йома-шәмбегә урыны менән көндөҙ плюс 16, төндә 5-кә тиклем етәсәк, тип хәбәр итә Рәсәй Гидрометеорология үҙәге. Синоптиктарҙың мәғлүмәттәренә ярашлы, был аҙнала төбәктә яуым-төшөм көтөлмәй.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Ниндәйҙер кире факт асыҡланған икән - хәбәрселәр менән осрашып, ни өсөн шундай хәл барлыҡҡа килеүгә аңлатма бирегеҙ, сәбәбен күрһәтегеҙ, уны хәл итеү саралары хаҡында һөйләгеҙ, - тине ултырышта хакимиәт башлығы Ирек Ялалов.*



ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ...



# КЕШЕЛӘРЕ ЛӘ ИҒТИБАРЛЫ...

**"Киске Өфө"лә баҫылған "Мега-тормош" кәңәштәренә ҡолаҡ һалып, бөтә аҡылымды туплап, ныҡлы ҡарарға килеп, сит тарафтарға сәйәхәткә китеп барам әле. Тәүҙә ауыр буласағын да, һуңынан, уйлағанымды тормошҡа ашырып ҡайтҡан саҡта кисерәсәк шатлыҡты ла алдан тойомланым. Әммә былай ҙа ауыр булыр тип кем уйлаған: торған һайын Өфөмдән алыҫлаша барам бит. Поезд тәгәрмәстәренең тыҡылдауы нисек итеп беренсе тапҡыр баш ҡалабыҙға килеүемде хәтерләтте.**

...Ана, бер ҡосаҡ балаларын эйәртеп, станцияға табан бер әбей атлай. Юлда осраған тимер-томор, быяла ярсыҡтарын ситкә алып бырғыта, осраған бер кешегә һис ялҡауы килмәй: "Быныһы - улымдың ҡыҙы, быныһы - ҡыҙымдың ҡыҙы... Мына Өфөнө күрһәтергә алып китеп барам әле..." - тип һөйләп китә. Беҙ өймәкләшеп, таныштырып бөткәнде көтөп торабыҙ ҙа, ары атлайбыҙ. Урыҫсаны әпәй-тоҙлоҡ ҡына беләбеҙ. Тарих уҡытыусыһы Тимерйән ағайҙың әйткән һүҙҙәре ҡолаҡ төбөндә генә: "Урыҫ телен тырышып өйрәнегеҙ. Ана, Иҙел аръяғына сығырға ғына ла "Иван!" тип ҡысҡырырға кәрәк бит". Ысынлап та, шулай икән. Иҙел буйына еткәс, теге ярға кәмә менән сығып алһын өсөн күмәкләп "Иван!" тип ҡысҡырҙыҡ.

Беренсе тапҡыр поезд күргәндәге хайран ҡалыуыбыҙ, шатлыҡ тойғолары әйтеп аңлатҡыһыҙ. Вагон эсе лыҡа тулы халыҡ. Әбей кешегә урын бирергә уйлаусы ла юҡ. Әммә иҫе китмәй нәнәйемдең: кешеләрҙең алдарына тиерлек ҡыҫылып ултыра ла (ни хәл итһендәр, шыуышалар инде): "Тере һөйәк һыя ул, үлһәң генә һыйҙырмайҙар", - ти, ә беҙгә кешеләр багаж ҡуя торған ергә үрмәләргә ҡуша. Күмәкләшеп менеп ултырабыҙ шундағы тәпәшәк урындарға. Башты тура ғына тотоп булмай, муйын ауыртып бөтә. Әммә был беҙҙең шатлыҡты һис кәметә алмай (Өфөгә китеп барабыҙ бит!), ауыҙ йырыҡ. Кешеләр беҙҙең нур сәсеп торған йөҙҙәребеҙгә ҡарай ҙа көләләр.

Вокзалға килеп төшәбеҙ. Ямғыр яуып үткән, еүеш асфальт... Ошо еҫ һуңынан һәр саҡ һиҫкәндерәсәк, инде күптән гүр эйәһе нәнәйемде, уның: "Йөрөтәм әле балаларымды, мин үлгәс, һөйләрҙәр..." - тигән һүҙҙәрен хәтерләтәсәк. Шулай булды беренсе тапҡыр Өфөбөҙгә килеүем. Һуңынан да бик күп килдек беҙ баш ҡалаға. Бала саҡ йәйенең күп көндәре Салауат һәйкәле аҫтындағы Әй урамында үтте. Үҙҙәре эштә саҡта балаларына иптәш булһын типтер инде, ике туған абзыйым менән еңгәм йыш алып ҡайталар ине беҙҙе. Ни тиһәң дә, бала сағым Өфө менән бик бәйләнгән. Хәҙер иҫләйем дә ҡайсаҡ көлөп ебәрәм: ҡыҙыҡ хәлдәргә тарыған саҡтар ҙа йыш булды. Оло кеше бит инде нәнәйем дә, аҙашабыҙ ҙа китәбеҙ. Бер көтөү бала эйәртеп йөрөп ҡара әле! Бер туҡталышта торған саҡта кемдер кемгәлер: "Вон ваш автобус!" - тигәйне, төрлөбөҙ төрлө ишектән һөрлөгөшөп индек тә киттек шул автобусҡа. Ҡайҙа барғанды белгән юҡ. Автобуста энә төртөр урын юҡ, ҡулдағы әйберҙәрҙе кеше араһынан тартып алып булмаһа, ысҡындырабыҙ ҙа ебәрәбеҙ, улар водителгә барып етеп, кире нәнәйемә ҡайта. Ә ул автобусты бер итеп, балаларын барлай. Арыу ғына барғас, беҙҙең бөтөнләй икенсе яҡҡа китеп барыуыбыҙ асыҡлана. Ярай әле кешеләр һәйбәт, матур итеп аңлатып, кәрәкле транспортҡа ултыртып ебәрәләр.

Ғөмүмән, баш ҡалабыҙҙа йәшәгән халыҡты ла яратам мин. Ундағы кешеләрҙең намыҫлы, иғтибарлы булыуына һоҡланаһың. Шуғалыр инде, һәр саҡ Өфөлә йәшәргә, бала сағым эҙҙәре һаҡланған урамдарҙы тапарға хыялландым. Иншалла, теләктәрем тормошҡа ла ашыр әле бер килеп...

**Люциә ЯХИНА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТӨП ТАЛАП - ПРОФЕССИОНАЛЛЕК!

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы ултырышта муниципаль киң мәғлүмәт сараларының эшмәкәрлеге тикшерелде.**

Бөгөн баш ҡалала "Вечерняя Уфа", "Киске Өфө", "Уфимские ведомости" гәзиттәре, "Уфа" журналы, "Вся Уфа" телевизион каналы эшләй. Шулай уҡ хакимиәттең *ufacity.info* рәсми сайты ла бар. Уларҙың маҡсаты - халыҡтың мәғлүмәти ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү. Атап үтелгән мәғлүмәт саралары заман менән бергә атлай, йыл һайын яңы рубрикалар барлыҡҡа килә, улар етешһеҙлектәрҙе асып һалыуҙа, халыҡҡа дөрөҫ мәғлүмәт еткереүҙә генә түгел, шулай уҡ йәштәргә йүнәлеш биреүҙә, рух, әхлаҡ, ватансылыҡ тойғоһо тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай.

Әммә ҡайһы бер, бигерәк тә федераль киң мәғлүмәт саралары сенсация артынан ҡыуып, мәғлүмәттәрҙе үҙҙәре теләгән яҡҡа бороп ебәрергә лә күп һорамай. Был инде баш ҡаланың имиджына кире йоғонто яһай. Быға ҡайһы бер осраҡта яуаплы вазифа биләүсе етәкселәр үҙҙәре лә юл ҡуя.

- Йыл һуҙымында муниципаль хеҙмәткәрҙең намыҫын бысратыусы бер нисә осраҡ теркәлде - ҡайһы бер чиновниктар киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренән ҡасып, йәшеренеп тигәндәй йөрөнө. Әгәр киң мәғлүмәт сараһы ниндәйҙер етешһеҙлекте асып күрһәткән икән, нимәнән ҡурҡырға? Киреһенсә, юлдарҙа асфальт ашалған, түбәнән һыу аға, балалар баҡсаһында йәки мәктәптә ниндәйҙер кире факт асыҡланған икән - хәбәрселәр менән осрашып, ни өсөн шундай хәл барлыҡҡа килеүгә аңлатма бирегеҙ, сәбәбен күрһәтегеҙ, уны хәл итеү саралары хаҡында һөйләгеҙ, - тине ултырышта хакимиәт башлығы Ирек Ялалов.

Шулай уҡ ул журналистарҙы ла теге йәки был теманы яҡтыртҡанда уйланырға, проблеманың төбөнә төшөргә, ентекле материал туплағас ҡына йәмғиәткә сығарырға саҡырҙы һәм һуңғы ваҡытта инженер хеҙмәтен тәьмин итеүсе предприятиелар, торлаҡ-коммуналь хужалығы эшмәкәрлегенә ҡағылышлы материалдарҙың һәм сюжеттарҙың кимәле үҫеүен, уларҙың профессиональ булыуы менән айырылып тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әйтәйек, баш ҡала ғына түгел, ғөмүмән, тотош Рәсәй юлдарҙың насарлығынан интегә. Ләкин Өфөлә муниципалитет яуаплылығына уларҙың 20 проценты ғына тура килә. Шулай уҡ вәкәләттәр сикләнмәгән 10 процент юлдар ҙа муниципалитет елкәһендә "ята". Ә инде ҡалған өлөш милекселәр, шәхси ойошмалар, заводтар һәм предприятиелар, төрлө республика һәм федераль ведомстволар ҡарамағына тура килә. Юлдар насар торошта булһа, муниципалитет уның хужаһын, йәғни кемдең балансында булыуын асыҡлап, сифат буйынса дәғүәһен белдерә. Ләкин киң мәғлүмәт саралары өсөн һәр осраҡта ла бер генә ғәйепле "табыла". Юлдарға асфальт түшәү мәсьәләһенең дә үҙенең нескәлектәре һәм үҙенсәлектәре бар. Шуға ла ҡала хакимиәте башлығы һәр осраҡта ла иғтибарлы булыуҙы һәм ваҡиғаларҙы, хәл-торошто тейешле профессиональ кимәлдә яҡтыртыуҙы төп талап итеп ҡуя.

Ғөмүмән алғанда, муниципаль киң мәғлүмәт саралары бөгөн халыҡты власть менән бәйләп тороусы звеноларҙың береһе. Тимәк, улар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә, асыҡ шарттарҙа эшләргә тейеш.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# БӘЙЛӘНЕШТӘР...

## Ҡытайға ла еткерер



**Башҡорт дәүләт аграр университеты Ҡытай юғары уҡыу йорттары һәм ғилми учреждениелары менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.**

Ҡытай Халыҡ Республикаһының эш сәфәре Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы илдәренең уртаҡ сараларын әҙерләү һәм үткәреү сиктәрендә ойошторолдо. Башҡорт дәүләт аграр университетының делегацияһын уның ректоры Илдар Ғәбитов етәкләне. Сәфәрҙең төп маҡсаты - мәғариф һәм фән өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү һәм студенттар менән алмашыу буйынса уртаҡ хеҙмәттәшлек йүнәлештәрен билдәләү. Башҡорт дәүләт аграр университетының ғилми һәм инновацион эшмәкәрлек буйынса проректоры Илгиз Аҫылбаев хәбәр итеүенсә, Башҡортостан делегацияһы Ҡытайҙың бер нисә ауыл хужалығы вуздарында һәм ғилми учреждениеларында булды. Цзямусы хакимиәтендә шулай уҡ ҡала мэры һәм башҡа рәсми кешеләр менән осрашыу үткән.

Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, хеҙмәттәшлек тураһында ҡул ҡуйылған килешеү әҙерлек программалары һәм заманса ҡорамалдар, приборҙар, иҫәпләү техникалары, программа, ғилми әҙәбиәт менән тәьминәт итеү һәм ике яҡлы ғилми тикшеренеүҙәр үткәреү өсөн ғалимдар, аспиранттар һәм студенттар менән алмашыуҙы аңлата. Бынан тыш, улар кафедралар араһында тура бәйләнеште яйға һалырға, белем биреү процесын ойоштороу тәжрибәһе менән уртаҡлашырға, уҡытыусыларҙың квалицикацияларын күтәрергә, халыҡ-ара конференциялар үткәрергә һәм уртаҡ ғилми хеҙмәттәр сығарырға ярҙам итәсәк.

**"Башинформ".**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2010 йылдан алып Өфөнөң йәлеп ителгән шәхси инвестициялар күләме 72 процентҡа артҡан һәм 102,5 миллиард һумға еткән. Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов әйтеүенсә, һуңғы ике йыл эсендә йәлеп ителгән инвестициялар баш ҡала үҫешенә ҙур йоғонто яһаған. "Беҙ Рәсәй Федерацияһында шәхси инвестициялар йәлеп итеп буйынса лидерҙарҙың береһе. Өфө ҡалаһының инвестициялар структураһы бөгөн идеаль схеманы тәшкил итә, уларҙың 90 проценты - шәхси инвесторҙарҙың аҡсаһы. Бындай структура миллионлы бер ҡалала ла юҡ", - тине Ирек Ялалов.

✓Башҡортостанда ауыл биләмәләре территорияларын таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса экологик кампаниялар башланды. Беренсе яҙғы шәмбе өмәһе 12 апрелдә уҙҙы. Территорияларҙы таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса сараларҙа 166 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Шәмбе өмәһе ҡатнашыусылары өс мең тоннанан ашыу сүп-сар йыйып, полигондарға сығарҙы. Тәүге экологик өмәләр йомғаҡтары буйынса, республикала ауыл биләмәләрен таҙартыу һәм төҙөкләндереү күләме алты процент тәшкил итте. Хәҙер шулай уҡ территорияларҙы йәшелләндереү эшмәкәрлеге алып барыла.

✓2014 йылдың беренсе кварталы эсендә Башҡортостан поликлиникаларында 170 меңләп кеше диспансер тикшереүен үткән. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, тикшереүҙәр йомғаҡтары буйынса 49166 кеше сәләмәт тип танылған, төрлө ауырыуҙар хәүефе факторҙары 60590 кешелә асыҡланған. Беренсе урында ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары - 10 629 осраҡ (31 процент), икенсе - эндокрин системаһы ауырыуҙары - 7847 осраҡ (23 процент), өсөнсө урында - һейҙек-енес системаһы ауырыуҙары - 3059 осраҡ (9 процент). Социаль мөһим ауырыуҙар ҙа асыҡланған: яман шеш - 36, шәкәр диабеты - 386, йөрәктең ишемик ауырыуы - 1936 осраҡ.

✓Даими Өфө халҡының иҫәбе, ҡала хакимиәтенә ингән ауыл биләмәләрен иҫәпкә алғанда, 1106,6 мең кеше тәшкил итә, тиелә мэрия мәғлүмәтендә. Халыҡ иҫәбе буйынса Өфө Рәсәйҙең 15 миллионлы ҡалаһы араһында 11-се урында тора. Башҡортостандың баш ҡалаһы халыҡтың тәбиғи үҫеше күрһәткесе буйынса миллионлы ҡалалар араһында беренсе урынды биләй. Һуңғы 13 йыл дауамында республикала үлем кимәленең кәмеүе менән бер юлы тыуымдың үҫеше билдәләнә. Халыҡтың тәбиғи үҫеше 2008 йылдан алып күҙәтелә.

ЙӘШТӘР ҠОЛАҒЫНА...

**Мәғариф өлкәһендә йылдан-йыл яңы закондар ҡабул ителә, уҡыу шарттары үҙгәртелеп тора. Белем биреү системаһының баҙар шарттарына яраҡлаштырыла барыуы, бюджет урындарының һаны кәметелеүе борсолдора. Бөтәһенең дә түләп белем алырға хәленән дә килмәй. Был осраҡта ни эшләргә? РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева һәм БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәзитов Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатының 11-се синыф уҡыусылары менән осрашыуҙа ошо ҡатмарлы һорауҙарға яуап бирергә тырышты. Сәлиә Шәрифйән ҡыҙының Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһындағы законына индерелгән һуңғы яңылыҡтар тураһында ниндәй фекерҙә булыуы менән беҙ ҙә ҡыҙыҡһындыҡ.**

# АБИТУРИЕНТТАР ҘА...

## үҙ хоҡуҡтарын белһен



- Был тормошта бәхетле булыу өсөн кеше өс шартты үтәргә: юғары белем алырға, күңеленә яткан һөнәр һәм эш урыны һайларға, уңышлы ғаилә ҡорорға тейеш. Был шарттар үтәлгән осраҡта, тормоштоң йәмен, йәшәүҙең ҡәҙерен белерһегеҙ. Әлеге ваҡытта һеҙҙең алда үҙегеҙгә оҡшаған, һуңынан эш урыны таба алырлыҡ һөнәр һайлау, юғары уҡыу йортоноң бюджет урынына инеү бурысы тора. Ошоға бәйле, Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһындағы законына индерелгән һуңғы үҙгәртеүҙәрҙең файҙалы яҡтары, һеҙҙең хоҡуҡтарығыҙ тураһында һөйләшеп алайыҡ, - тип башланы һүҙен Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы. - Тәү сиратта, ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт университетының Сибай ҡалаһы филиалында Мәскәү, Санкт-Петербург, Өфөләге юғары уҡыу йорттарынан килгән вәкилдәр менән булған осрашыу тураһында һөйләп китәйем. Был сараны "Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге" рәйесе Азат Баҙранов менән үткәрҙек. Рәсәйҙең иң алдынғы вуздарынан килгән вәкилдәр уҡытыу ниндәй йүнәлештәр буйынса алып барылыуы, унда инеү шарттары, БДИ һөҙөмтәләренең кимәле, студенттарҙың йәшәү, уҡыу шарттары тураһында тәплә, йөкмәткеле мәғлүмәт бирҙе. Яҡын киләсәктә бындай осрашыуҙарҙы, республикабыҙҙа юғары белемле йәш белгестәр әҙерләү, мөмкин тиклем күберәк балаларҙы бюджет урындарына уҡырға индереү маҡсатында, Башҡортостандың бүтән төбәктәрендә лә ойоштороға ниәтләйбеҙ.

Бөгөн беҙ Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһындағы законының 56-сы статьяһында ҡаралған маҡсатлы йүнәлтмәләр буйынса уҡырға инеү хаҡында һөйләшәйек. Барығыҙ ҙа беләһегеҙ, законға 2013 йылда үҙгәртеүҙәр индерелмәҫ элек, маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға инеү өсөн урындар республиканың һәр төбәгенә бүлеп бирелә, был йүнәлтмәләрҙе район хакимиәтендә юлларға мөмкин ине. Улар буйынса, тик исемлектә күрһәтелгән вуздар һәм уларҙың аныҡ факультеттарына бер-нисә кеше дәғүә итә ала торғайны. Хәҙер был система үҙгәрҙе, һәр юғары уҡыу йортонда маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға алыу ҡаралған. Етмәһә, маҡсатлы йүнәлтмә өс яҡлы килешеү төҙөүҙе күҙаллай: ул килешеүгә граждан, кадрҙарға мохтаж булыусы ойошма һәм был йүнәлештә юғары белем биреүсе уҡыу йорто ҡул ҡуйырға тейеш. Тимәк, һәр кем киләсәктә эшләргә теләгән ойошмаға барып, унда ниндәй һөнәр эйәләренә ҡытлыҡ кисереүҙәрен белешә, ойошма маҡсатлы йүнәлтмә бирергә риза булған осраҡта, эшкә ҡайтасағын әйтеп, тейешле документтарҙы йыя ала. Гражданға йүнәлтмә бирергә ризалашҡан ойошма мотлаҡ тулыһынса йә өлөшләтә дәүләт ҡарамағында булырға тейеш. Әммә бындай килешеүҙе апрель айынан да һуңға ҡалмай төҙөп өлгөрөргә кәңәш итәм.

Әгәр ҙә юғары уҡыу йортоноң түләүле бүлегенә инһәгеҙ, сессияларҙы тик "бишле" билдәләренә генә тапшырып, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан осраҡта, уҡыуҙан өлгәшә алмай киткән төркөмдәштәрегеҙ урынына "бюджетҡа" күсеү хоҡуғығыҙ бар. Бындай мөмкинлек асылмаһа, уҡыу барышында ла эш урыны бирергә ризалашҡан дәүләт предприятиеһы менән килешеү төҙөргә мөмкин. Был осраҡта, предприятие белгесте уҡытыу өсөн кәрәкле сығымдарҙы тулыһынса үҙ өҫтөнә ала. Килешеү төҙөгәндә хатта студентҡа күрһәтеләсәк өҫтәмә матди ярҙам күләмен дә билдәләргә була. Түләүле уҡыу бүлегенә ингән студенттың хәлен еңеләйтеү өсөн тағы бер ысулы бар. Уҡыу йортона аҡсалата бурыстарҙы белем алыу өсөн бирелгән кредит ярҙамында ҡапларға мөмкин. Белем алыу өсөн бирелгән кредит уҡып бөткәндән һуң 10 йыл дауамында кире ҡайтарыла. Тәүге ике йылда процент ставкалары (юғары түгел) түләйһең. Кредит биргән банк өҫтәмә штрафтар һалмайынса, бирәсәкте өлөшләтә йәки бер юлы тулыһынса түләп бөтөрөргә рөхсәт итергә бурыслы.

Иң мөһиме, хәҙер һеҙҙең мәнфәғәттәрҙе дәүләт тулыһынса ҡайғыртмай, киләсәктә эш урыны табыу мәсьәләһен үҙегеҙ хәстәрләргә тейеш икәнде аңлағыҙ. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә, тик ятҡан таш мүкләнә. Шуға күрә, киләсәгегеҙгә битараф булмағыҙ, йөрөп, һорашып, мөмкин тиклем һеҙҙең талаптарға яуап бирерҙәй шарттарҙа маҡсатлы йүнәлтмәләр алып өлгөрөргә тырышығыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сәлиә Мырҙабаева билдәләүенсә, 2013-2014 уҡыу йылына Башҡортостанда маҡсатлы йүнәлтмәләр буйынса уҡырға инеү мөмкинлеге менән бик һирәктәр файҙаланған. Был граждандарҙың үҙ хоҡуҡтарын белеп етмәүенән дә килә, ти ул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## БАЛАМ ҒӘРИП

**Әлеге ваҡытта ике йәшлек ғәрип бала менән өйҙә ултырам, йәғни бала ҡарау буйынса ялдамын. Ғәрип балаларҙы ҡараған өсөн тәғәйенләнгән айлыҡ 5500 һум күләмендәге компенсацион түләүгә хоҡуғым бармы?**

- Айлыҡ компенсацион түләү хеҙмәткә яраҡлы, ләкин эшләмәгән һәм 18 йәшкә тиклемге ғәрип баланы ҡараған граждандарға билдәләнә. Улар баланың ата-әсәһе, уллыҡҡа алыусы, опекун һәм ғағыусы булырға мөмкин. 2013 йылдың 1 ғинуарынан бындай түләүҙең күләме 5500 һум. Һеҙҙең эш урынығыҙ бар һәм рәсми рәүештә бала ҡарау буйынса ялда иҫәпләнәһегеҙ, шуға күрә бындай хоҡуҡҡа эйә түгелһегеҙ.

## ДОКУМЕНТ КҮРҺӘТЕҮ МОТЛАҠМЫ?

**Ҡатыныма итек һатым алғайным, ләкин бәләкәй булыу сәбәпле, магазинға кире алып барырға тура килде. Һатыусы аҡсаны кире ҡайтарырға ризалашты, ләкин шәхесте раҫлаусы документ талап итте. Ул законға ярашлы эш иттеме?**

-Магазин хеҙмәткәре һеҙгә дөрөҫ талап ҡуйған. Һатып алынған тауарҙы кире килтергән осраҡта, аҡса сығым-касса ордеры (расходно-кассовый ордер) аша ҡайтарыла. Ә ордерҙа мотлаҡ тауарҙы кире алып килеүсенең документ мәғлүмәттәре (шәхесте раҫлаусы документ, хәрби билет, водитель танытмаһы булырға мөмкин) күрһәтелергә тейеш. Был талап Рәсәй Федерацияһы Үҙәк Банкының махсус хаты менән билдәләнгән (1993 йылдың 4 декабре, № 18).

## МУТЛАШЫУСЫЛАР ИШӘЙӘ

**Кредитын ваҡытында ҡайтармаған күршемә үҙен суд приставы тип танытыусы кеше килеп, бурысының бер өлөшөн ҡаплау маҡсатында ҡыйбатлы техникаһын алып киткән. Һуңынан беленеүенсә, ул коллектор агентлығы хеҙмәткәре булған. Улар бындай хоҡуҡҡа эйәме?**

- Банк йәки башҡа төрлө кредит ойошмаһына бурысын ҡайтармаған граждандарҙың техникаһына, йорт йыһазына, ғөмүмән, шәхси милкенә бары тик суд ҡарары нигеҙендә суд приставтары ғына опись яһарға һәм тартып алырға мөмкин. Коллектор агентлығы йәки банк хеҙмәткәрҙәре бындай хоҡуҡҡа эйә түгел.

Ошондай хәлгә юлыҡҡан осраҡта юристар уяу булырға һәм өйөгөҙгә килеүсенең документын иғтибар менән тикшерергә кәңәш итә. Суд приставынан таныҡлығын асыҡ килеш күрһәтеүен һорағыҙ. Таныҡлыҡтағы фотоһүрәт аныҡ, ә ҡултамға аңлайышлы булырға тейеш. Шулай уҡ таныҡлыҡтың бирелеү ваҡытына ла иғтибар итегеҙ. Суд приставының күкрәк тамғаһының (нагрудной знак) серия һәм номерын яҙып алып, урындағы суд приставтары хеҙмәтенә шылтыратып аныҡлағыҙ. Суд приставы ҡулында суд ҡарарының төп нөсхәһе булырға тейеш. Әгәр ҙә өйөгөҙгә килеүсе ҡарарҙың күсермәһен генә күрһәтә икән, тимәк, һеҙҙең алда мутлашыусы.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләнә.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан тамырҙарын таҙартыу

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы таҙартылған 4 баш һарымһаҡты, 4 лимонды ҡабығы менән ит турағыстан үткәрергә, 3 литрлы банкаға һалырға, йылымыс хәлгә тиклем һыуытылған ҡайнаған һыу ҡойоп, 3 көн төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торабыҙ. Һөҙәбеҙ. Көнөнә 3 тапҡыр 75-100-әр грамм эсергә. Бер банканы эсеп бөткәс, тағы әҙерләргә кәрәк була.

### Баш бармаҡтағы оро

❖ 100 грамм һыйырғойроҡ (коровяк) орлоғона 2 литр һыу ҡойоп, ҡайнатырға. Ошо һыуға аяҡтарҙы тығып ултырырға. Баш бармаҡ эргәһендәге оронoң эҙе лә ҡалмаҫ.

### Остеохондроз

❖ Тамыры менән бергә алынған селдерейҙы йыуырға, ит турағыстан үткәрергә, һутын һығып алырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2 ҡалаҡ эсергә. Һуты һығып алынғандан һуң ҡалған сельдерей менән компресс эшләргә. Ауыртҡан урынды үҫемлек майы менән майларға, сельдерейҙы һалырға, ҡалын туҡыма, унһың өҫөнән мамыҡ шәл бәйләргә. Бер сәғәт тирәһе тоторға. Түҙһәгеҙ, тағы ла оҙағыраҡ торорға мөмкин. 3-4 тапҡыр компресс яһағандан һуң, остеохондроз шеше бөтәсәк.

❖ "Сельдерей терапияһы" бөйөрҙәр эшмәкәрлеген яҡшырта, цистит һәм простатиттан ҡотҡара.

❖ Остеохондроз ваҡытында озокерит (тау балауыҙы, нефть сығанаҡлы тәбиғи минерал) йәки бишофит (химик сәнәғәттә, төҙөлөштә, шулай уҡ медицинала ҡулланылған тәбиғи минералдар комплексы) менән йылытыусы компрестар яҡшы һөҙөмтә бирә. Уларҙы аҡ шыршы майы менән алыштырырға була.

### Ҡурылдай

❖ 300 грамм бал, 100 грамм һыу һәм ваҡлап туралған алоэ япрағын талғын утта 2 сәғәт ҡайнатырға. Һыуытырға, болғатырға. Һалҡын урында һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Был дауа бигерәк тә балаларға килешә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

**✓ Үҙенең ғүмерлек эшен табып, уға тоғро булыусылар шулай уҡ геройҙар, сөнки тормош үҙ көсәрендә тап шундай кешеләр иҫәбенә генә тотоноп тора. Бер нәмәгә хәл ҡалмағанда ла яңынан йәшәй башлау ҙа геройлыҡҡа торошло.**



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЯМҒЫР АПАЙ...

## яу, яу

**Көньяҡ-көнбайыш башҡорттары ямғыр теләү мәлендә ҡорбан салмаған, ә өйҙән-өйгә йөрөп йыйылған ярманан йола бутҡаһы бешергән. Ағиҙел аръяғында көн итеүселәр ямғыр бутҡаһын мотлаҡ ҡыҙҙырылған бойҙайҙан әҙерләгән.**

Ҡайһы бер урындарҙа бойҙайҙы мотлаҡ намаҙ уҡыу урындарында тирмәндән тартып, ваҡлағандар. Бутҡа ашалып бөткәс, ҡаҙанды теләктәр әйтеп, һыуға ташлағандар. Һыуға ташланған ҡара ҡаҙан ҡара болотто үҙенә тарта, тип ышанғандар. Теләккә сығыр алдынан ауылдағы бөтөн ут усаҡтарын һүндереү осраҡтары ла теркәлгән (мәҫәлән, Мәләүез районында). Бынан һуң ауыл халҡы Нөгөш буйына сығып, яңынан ут тапҡан (сығыр уты). Бының өсөн 10-15 епте бер яҡтан - ҡайын олонона, икенсе яҡтан аттарға бәйләгәндәр. Аттар түңәрәк буйлап ҡыуылған һәм ышҡылыу көсөнән ағаска ут тоҡанған. Яңы ут менән тоҡандырылған сыраҡты ауыл тирәләй өс тапҡыр ураҡандар, һәр ғаилә унан ут алып ҡалған. Яңы ут башҡа ысулдар ҡулланып та табылған. Ошо утта ҡорбан ите бешерелгән. Бөтөн ауыл халҡы ҡатнашҡан йола күмәкләп намаҙ уҡыу, теләктәр теләү, ит бешкән ҡаҙанды йылға һыуына батырыу менән тамамланған. Шулай уҡ оҙайлы ямғырҙар мәлендә йәки эпидемияларҙан ҡотолоу өсөн дә яңы ут табыу тураһында мәғлүмәттәр бар. Ямғыр теләү йолаһында ҡара ҡаҙан менән бер рәттән, аттың баш һөйәге лә ҡулланылған. Уны шулай уҡ ниндәйҙер һүҙҙәр әйтеп, һыуға һалғандар.

Йыл ныҡ ҡоро килгәндә көньяҡ-көнсығыш өлөштә йәшәүселәр ҡәберлеккә сыҡҡан. Ҡоролоҡта үҙ үлеме менән үлмәгән йәки яуыз кешеләрҙең йәне ғәйепле, тип иҫәпләгәндәр. Улар "бөтөн ямғыр болотон йотоп яталар, имеш". Уларҙың ҡәберен саҡ ҡына ҡаҙып, һыу ҡойғандар. Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылының бер кешеһе һөйләүенсә, йәшен һуғып үлтергән бер кешенең ҡәберенә 40 (41) сүмес йәки биҙрә һыу ҡойғандар. Ҡайһы бер яҡтарҙа зыярат янына сығып, намаҙ уҡығандар, теләк теләгәндәр, әрүахтарҙың рухына мөрәжәғәт иткәндәр. Был ололарға үтенеү йолаһы тип аталған. Һуңынан ҡорбан салып, барыһын да һыйлағандар. Сәй эсеү булмаған, бары тик муллаға ғына сәй эсергәндәр. Ғафури, Йылайыр, Баймаҡ, Хәйбулла һәм башҡа райондарҙа ҡоролоҡ мәлендә изге таштарҙы, шулай уҡ әүлиә ҡәберҙәренең таштарын йыуғандар, йәиһә май, бал менән һылағандар. Оҙайлы ямғырҙар туҡтаһын өсөн ташты майлау йолаһы ла билдәле.

Ямғырлы йылдарҙа аяҙ теләү йолаһы башҡарылған. Бының өсөн тауға сығып, аҡ ҡорбан салғандар. Балалар шулай тип һамаҡлаған:

*Ҡояш апай, кил, кил,*
*Ямғыр апай, кит, кит.*
*Майлы тәкә һуйырмын,*
*Һиңә майын бирермен,*
*Үҙем итен ашармын.*
*Бесәйгә һурпаһын бирермен,*
*Эткә һөйәген бирермен,*
*Ҡояш апай, ҡалҡ, ҡалҡ!*
*Һалҡын еҙнәй (ағай), кит, кит!*
*Һимеҙ тәкә һуйырмын,*
*Майын һиңә бирермен...*

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Берәйһенең көсһөҙ кешене яҡлағанын, үҙенең йәнен аямайынса утҡа-һыуға ташланыуы тураһында ишеткән һайын, ирекһеҙҙән, мин дә шулай эшләй алыр инемме икән, тигән һорау һәр кемдә лә уяна торғандыр. Салауат, Бабич, Вәлиди кеүек батырҙарыбыҙҙың ҡаһарманлығы ла беҙҙә һаман ғорурлыҡ тойғолары тыуҙыра, уларҙы герой, тип ҙурлайбыҙ, уларға оҡшарға ынтылабыҙ. Тик шулай ҙа нимә һуң ул ҡаһарманлыҡ? Бөгөнгө заманда геройлыҡҡа урын бармы? Башҡорт дәүләт университетының өлкән уҡытыусыһы, психоаналитик Әлфиә Сәғит ҡыҙы БАЙРАМҒОЛОВА менән ошо һорауға яуап эҙләйбеҙ.**



# ИЗГЕЛЕКТЕ КҮРЕҮ ӨСӨН...

## яуызлыҡ та кәрәк

- Башҡорт халҡында батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ төшөнсәһе тыуған ил, тыуған ер менән тығыҙ бәйле. Батыр тип аталырға һәләтле кешене ил күрке тип атап, уның ил алдындағы бурысы шәхси мәнфәғәттәренән өҫтөн икәнен халыҡ аныҡ билдәләгән: "Батыр "илем" тип утҡа ингәндә, ҡурҡаҡ "билем" тип мейескә инер". Тимәк, геройлыҡ илһөйәрлек менән дә тығыҙ бәйле. Халҡың өсөн үҙенде арнау геройлыҡтың иң юғары нөктәһе ул. Кемделер һыуға батыуҙан йәки янғындан ҡотҡарыу кеүек ҡаһарманлыҡтың физик төрөнән айырмалы рәүештә, йәмғиәттә ҡабул ителгән төрлө ҡағиҙәләр һәм нормаларға ҡаршы барыусы бындай ҡаһарманлыҡ мораль типҡа ҡарай. Бындай кешеләргә милләтсе мөһөрө лә тағылырға ғына тора, әммә халҡын яратҡан кеше бындай ваҡлыҡтарға ҡарамайынса, тәғәйенләнешен үтәй. Эйе, Салауаттар, Кинйәләргә халыҡ бөгөн дә мохтаж, тик уларға хәҙер заманға ярашлы бер аҙ хәйләкәрерәк булыу кәрәк. Дошмандарҙы ҡорал менән еңер ваҡыт түгел, уларға икенсе төрлөрәк тәьҫир итеү юлдарын ҡулланыу зарур. Ауыл ерҙәрендә тыуған проблемаларҙы хәл итеү менән шөғөлләнгән милләттәштәребеҙ ҙә, ерҙәребеҙ башҡалар ҡулына күсмәһен өсөн тырышлыҡ һалыусы, халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыусылар ҙа, һис шикһеҙ, герой тип аталырға хаҡлы.

Әле генә илебеҙҙә Олимпия уйындары тамамланды. Спортсылар ҙа бөйөк геройҙар, сөнки герой булып танылыу өсөн кешенең аңында ниндәйҙер юғары маҡсаттар, идеялар булыуы мотлаҡ. Мәҫәлән, аҫабалыҡ тойғоһо башҡорттоң генетик хәтерендә һаҡланып, быуындарға тапшырыла килә, был осраҡта беҙҙең менән "Һин еренде һаҡларға тейешһең" тигән тойғо идара итә. Спортсылар иһә беҙҙең ил башҡаларҙан ҡайтыш булмағанлығын күрһәтеү өсөн, йәғни, үҙе өсөн дә түгел, ә илен алға сығарыу өсөн тырыша. Унан һуң, ихтыяр көсө - үҙе батырлыҡ. Спорт спортсыға иҫ киткес юғары талаптар ҡуя. Спортсыны беҙ физик көскә генә эйә булған кеше итеп ҡабул итергә өйрәнгәнбеҙ, ә уның уңышында физик һәм эмоциональ, психологик яҡтың гармоник тигеҙлеге ята. Уңыштарына баш сөйөп, маҡтанып китмәҫ өсөн ул үҙенең яҡшы яҡтарын да, насар сифаттарын да еңә белергә тейеш. Уңышлы, башҡалар өсөн өлгөлө кеше булыуҙың төп талабы ла бит - иң башта үҙ-үҙенде еңеү.

Баланың бәләкәй саҡта геройлыҡҡа ынтылышы көслө була, ул үҙе уйлап сығарып, төрлө уйындар уйнай, ғифриттәргә ҡаршы "көрәшә". Психологик күҙлектән ҡарағанда, бындай уйындар уның камил үҫеше өсөн бик файҙалы. Бала ошо ғифриттәр сүрәтендәге төп дошмандарын - кире сифаттарын еңергә өйрәнә. Тик ата-әсә балаһына уның ысын дошманы нимә икәнен төшөндөрөргә лә тейеш. Яңыраҡ бер ваҡиға барыбыҙҙы ла шаҡ ҡатырҙы - мәктәп уҡыусыһы яҡшы баһа ҡуймаған өсөн уҡытыусыһына мылтыҡтан ут асты. Әгәр ҙә ул насар билдә алғас, ялҡаулығын еңеп, дәрескә уҡып, әҙерләнеп килһә, үҙен-үҙе еңер ине. Сөнки тормошта килеп тыуған һәр ҡаршылыҡты кеше эш менән еңергә бурыслы. Әгәр үҙ өҫтөндә эшләмәй икән, ул агрессия менән еңә башлаясаҡ. Был уҡыусы ла сәбәпте үҙендә түгел, ә уҡытыусыла күргән, тимәк, унда ҡаршылыҡ, яуызлыҡ уҡытыусыла тупланған, тигән уй тыуған һәм ул был "дошман"ды юҡ иткән. Агрессияһын еңә алһа, ул, һис шикһеҙ, герой булыр ине.

Философик яҡтан ҡарағанда ла, аҡ һәм ҡара көстәр бербереһе менән һәр ваҡыт көрәшә. Был донъяла тигеҙлекте һаҡлап тороу ҙа кәрәк, сөнки яуызлыҡ булмаһа - изгелекте, изгелек булмаһа, яуызлыҡты белмәҫ инек. Йәшәү - ул көрәш, тип бушҡа әйтмәйҙәр, бында тышҡы факторҙарҙан бигерәк, ана шул күңелендәге изгелек менән яуызлыҡтың гармонияла булыуына ынтылыш тураһында күберәк әйтелгән кеүек. Герой тип иҫәпләнерлек кеше юғары идеалдарҙы маҡсат итеп йәшәй, тигәйнек, бындай кешенең йәшәү көсө, тормош шарттарына сыҙамлылығы ныҡ була. Нимәгәлер ынтылыу, энтузиазм кеүек кешеләге иң ҡиммәтле сифаттар ҙа хас уларға, ошолар булмаһа, кешене халҡының яҙмышы ла борсомай, ул спортсы ла булып китмәй, ғөмүмән, герой төшөнсәһе уға бөтөнләй ят була.

Шулай ҙа тормошта геройҙар етерлек. Үҙенең ғүмерлек эшен табып, уға тоғро булыусылар шулай уҡ геройҙар, сөнки тормош үҙ көсәрендә тап шундай кешеләр иҫәбенә генә тотоноп тора. Бер нәмәгә хәл ҡалмағанда ла яңынан баш ҡалҡытып йәшәй башлау ҙа геройлыҡҡа торошло. Иң мөһиме, ҡаһарманлыҡ башҡарыусылар бар һәм улар теге йәки был ситуацияла башҡаса була алмайҙар икән, тимәк, бөгөнгө көндә лә геройҙарға һәм геройлыҡҡа урын бар.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИР-АТ ИСЕМЕНДӘ...

## ҡылыстар сыңлауы сағылһын

**Рәсүл Ғамзатовтың "Ҡыҙ балананың исемендә йондоҙ балҡыуы йәки сәскәләр нәфислеге, ир-ат исемендә ҡылыстар сыңлауы һәм аҡһаҡалдар аҡылы сағылырға тейеш", тигән һүҙҙәрен уҡыу миңә бик ныҡ тәьҫир иткәйне. Ысынлап та, балаға исем һайлау еңел эштәрҙән түгел шул, тип уйлағайным шул саҡ.**

Кешегә ғүмерендә иң күп ишетергә тура килгән һүҙ - ул уның исеме. Ябай ғына итеп әйткәндә, ошо бер һүҙ үҙенә генә хас әйтелеше, аһәңе менән дә кешенең яҙмышын билдәләй. Хәҙерге тел менән әйткәндә, исем - ул яҙмыштың формулаһы, коды, тормош программаһы. Ул кешегә ғүмере буйына эйәреп йөрөй һәм уны бетеү урынына һаҡлап йөрөтә. Кеше үҙен донъяла ошо исем менән таныта. Бала исемһеҙ бер көн, хатта бер сәғәт тә ҡалырға тейеш түгел, юғиһә, уны енпәрейҙәр алмаштыра ла, үҙҙәренең исемен ҡушып өлгөрә, һөҙөмтәлә бала зәғиф йә ауырыу була йәки үлә, тип уйлаған ата-бабалар. Халҡыбыҙҙа "йүргәк исеме" ҡушыу булған. Кендек инәһе баланы ҡабул итеп алғас та, ҡолағына шыбырлап, исемең шулай булһын, тип йүргәккә төргән. "Йүргәк исеме" йәки "тәүге исем" баланы яман көстәрҙән һаҡлай, тигән ышаныу йәшәгән. Борон, исемен белгән кешегә төрлөсә тәьҫир итеп була, тип инанғандар. Баланы ике төрлө исем менән йөрөтөү йолаһы күп халыҡтарҙа таралған. Ғәм халыҡ араһында бер төрлө атап йөрөтһәләр, икенсе исемен бары яҡындары ғына белгән. "Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын, ырыуыңа тап килмәһә, ораныңа тап булһын", тигән мәҡәл халыҡтың исемгә ҡарашын асыҡ сағылдыра. Мәғәнәһеҙ исем ҡушыуҙан тыйылғандар.

Ә үҙемә килгәндә, миңә йыйнаҡ, әйтеүе еңел, яҡшы мәғәнәле исемдәр оҡшай. Һәр кем балаһын күңеленә ятҡанса атай ала. Һуңғы йылдарҙа йышыраҡ тәрән мәғәнәле, бай тарихлы, рухлы, матур яңғырашлы башҡорт исемдәре күбәйҙе, тиһәк тә... Алина, Ралина, Розалия, Ленар, Эмиль, Вильдан (Владимир Ильич Лениндан) кеүек мәғәнәһеҙ, сит телдәрҙән алынған, әйтелеше ҡолаҡҡа ятып етмәгән исемдәр ҙә күп кенә шул.

Шул уҡ ата-әсә исемдең русса яҙылышына ла иғтибар итергә тейештер, тип уйлайым. Документтар тултырғанда, хатта ябай ғына мәктәп дәфтәрен тултырғанда ла баланың исеме йәмһеҙ, мәғәнәһеҙ яңғырауы мөмкин. Шунан килеп сыға ла инде баланы үсекләүҙәр. Ғөмүмән, исемдәрҙе теркәгән ауыл биләмәләре, ЗАГС органдары белгестәре иғтибарлы булырға тейеш. Сөнки аталарының исемдәре төрлөсә яҙылған осраҡтарҙы ла күрергә тура килә беҙҙең замандарҙа. Бер туған балалар, аталары исеме төрлөсә. Һуҙынҡыларға бөткән Ғайса, Хәмзә, Сафа исемле атайҙарҙың балалары төрлөсә теркәлгән: Ғайсаевна, Ғайсовна, Хамзаевна, Хамзич, Хамзаевич, Сафаевич, Сафич. Улар төрлө ата балалары һымаҡ килеп сыға түгелме?

Ә бына минең ғаиләмдә, Аллаға шөкөр, атай-әсәйебеҙ беҙгә башҡортса ла, русса ла матур яңғырашлы исемдәр ҡушҡан: Гөлниса, Гөлфиә, Гөлназ, Арыҫлан. Ҡыҙҙар исеме, гөл кеүек матур, тигәнде аңлатһа, Арыҫлан исеме үҙенән үҙе аңлашылып тора.

**Гөлниса САФИНА,**
**БДУ студенты.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ЕР АҪТЫНДА ХАЗИНАЛАР

## Уларға һуң кем хужа?



**Башҡортостаныбыҙҙа төрлө ҡаҙылма байлыҡтарҙың мул булыуын яҡшы беләбеҙ. Тик әле һүҙ ер аҫтындағы башҡа хазиналар тураһында барасаҡ.**

Ер аҫты иҫ киткес күп серҙәр һаҡлай икән ул. Үҙемдең ишеткән-күргәндәрем буйынса шундай һығымтаға килдем әле. Тыуған төйәгем - Көйөргәҙе районының Бәләкәй Муса ауылы тирәһендәге һуңғы тиҫтә йылдар эсендәге күҙәтеүҙәрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым. Мин бәләкәй саҡта атайым мәрхүм (1909 йылғы) беҙҙең ауыл менән Ҡансыра ауылы араһындағы убаларҙы күрһәтеп, уларҙың атамаларын да аңлата торғайны. Хәҙер ул урындар һөрөлөп, ер менән тигеҙләнгән. Ә бит был убалар боронғо серҙәрҙе һаҡлауы ихтимал ине. Бик йәл...

Ә бына күрше Яңы Муса ауылы эргәһендә кемдәрҙер бик оҙаҡ ҡаҙыу эштәре алып барҙы. Тик улар ысын археологтар булдымы икән, тигән шик тыуа. Ысын ғалим-археолог булһалар, боронғо ҡәберлектән сыҡҡан һөйәктәрҙе, көршәк ярсыҡтарын (бик матур амфора булған ул) тырым-тырағай ташлап китмәҫтәр ине. Был ҡыҙыҡлы әйберҙәрҙе ауыл балалары өйҙәренә алып ҡайтып, уйнатып йөрөнөләр. Ә ҡәберлектән табылған иң һоҡландырған хазина - ул ҙур алтын табаҡ ине. Уны республиканан ситкә олаҡтырҙылар, тинеләр...

Беҙҙең ауыл янынан аҡҡан Ҡушбүләк йылғаһы (Мәләүез йылғаһының ҡушылдығы) буйындағы тау башында ҡыҙыл балсыҡ сығара башлағайнылар (төҙөләш өсөн ташығандарҙыр инде). Шул ваҡытта экскаватор һоҫҡоһо боронғо ҡәберлекте соҡоп сығара. Ике кеше бергә ерләнгән ҡәберлек була ул. Һөлдәләр эргәһенә төрлө әйберҙәр һалынған булған. Ҡаҙыу эштәре туҡтатыла. Был осраҡта ла ҡәберлектән табылған ҡылыс менән ауыл малайҙары уйнап йөрөй. Ә һөйәктәрҙе балсыҡ ташыған ойошмала ҡараулыҫы булып эшләгән Бәләкәй Муса ауылы кешеһе ауыл зыяратына алып барып күмә. Ҡәберлектән тағы нимәләр табылғандыр - уныһы билдәһеҙ. Ҡылыс ҡына булмағандыр бит инде унда. Ауыл Советы рәйесенә лә, район музейы хеҙмәткәренә лә мөрәжәғәт итеп, белгестәр саҡырырға кәрәклеге тураһында әйтеп ҡараным, әммә эш шул урында туҡтап ҡалды, шикелле. Дөрөҫ, хәҙер был тауҙа балсыҡ сығармағандары тойолмай. Ә ҡәбер соҡоро таҡталар менән ҡаплап ҡуйылған...

Күрше Илкәнәй ауылында ла археологик ҡаҙыу эштәре алып барылды. Уларҙан һуң тәрән соҡор тороп ҡалды. Бында табылған ҡәберҙә боронғо яугир менән уның аты ерләнгән булған. Бынан саҡ ҡына арыраҡ ошо ауыл кешеһе миңә бер серле урынды күрһәтте. Тигеҙ яландағы ер өҫтөндә бик күп оҙонса дүртмөйөштәр ҡалҡып сығып тора ине. Был боронғо торама булыуы ихтимал, тип уйланым мин, үҙемсә һығымта яһап. Шул турала Әнүәр Әсфәндийәровҡа төбәп хат та яҙғайным (ул ошо Илкәнәй ауылының кейәүе ине), тик ниңәлер ул хат ебәрелмәй ҡалды. Һуңғараҡ бер фермер был яланды һөрөп, көнбағыш сәскәйне. Быны күргәс, ниңә эште аҙағына алып барып еткермәнем икән, тип бик үкендем...

Бына шулай, беҙҙең күҙ алдында мәңгелеккә юйыла бара ер аҫты серҙәре, тарих эҙҙәре...

Ер аҫты хазиналарына, әлбиттә, дәүләт хужа. Әммә ул хазиналар бит ошо ерҙәрҙең аҫабалары булған башҡорттарҙың тарихы менән бәйле. Шуға ла хөкүмәтебеҙ археология өлкәһенә тейешле иғтибар бүлһен ине, тип теләге килә. Әйтәйек, хоккейға бихисап аҡса түгелә лә баһа, ә ниңә фәнгә шунса сығым йәлләргә? Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп китәйем: үҙебеҙҙең киноиндустрияны үҫтерһәк, күпме иҫ китерлек тарихи фильмдар төшөрөргә булыр ине Башҡортостан ерлегендә! Тарихыбыҙ - баһалап бөтөргөһөҙ ҡиммәтле хазина ул, шуны аңлаһаҡ ине.

Ошо юлдарҙы яҙғанда, беҙҙең райондың Таймаҫ ауылында булған хәл иҫкә килеп төштө. Унда бынан байтаҡ йылдар элек бер кеше өй һалырға нигеҙ ҡаҙған саҡта хазинаға тап була. Унан боронғо тәңкәләр, мәрйендәр һ.б. байлыҡ килеп сыға. Улар ауыл халҡы араһында бик тиҙ таралып бөтә, бик әҙҙәре генә ғалимдар ҡулына барып эләгә. Бынан шул күренә: кешеләр ер аҫтынан сыҡҡан хазинаның дәүләттеке булыуын, уның оло тарихи әһәмиәткә эйә икәнен аңлап етмәй.

Һуңғы ваҡытта ер аҫтында ниндәй хазина ятҡанын билдәләй алыусы металл эҙләгестәр һатыла башланы. Шуны ҡулланып, теләһә кем хазина таба һәм уны үҙләштерә аламы икән, тигән һорау тыуа. Уны тапҡан хәлдә лә, хөкүмәткә тапшырып, күпмелер процентын ғына алырҙарына ышаныс юҡ. Хәҙер элекке кеүек энтузиаст археологтар, намыҫлы эҙәрмәндәр бармы икән ул? Беҙ арҙаҡлы ғалимыбыҙ Нияз Мәжитов алдында баш эйергә тейешбеҙ. Уның кеүек археологтарыбыҙ күберәк булһа, тарихи хазиналарыбыҙ шул тиклем әрәмшәрәм ителмәҫ ине, моғайын...

Мин әле үҙ ауылымдың тирә-яғына ғына байҡау яһаным, ә бөтөн Башҡортостан буйынса хәлдәр нисек икәнен күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Бәләкәйҙән археология менән ҡыҙыҡһынһам да, мин был өлкәлә белгес түгел. Шуға күрә, ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса, бәлки, яңылышамдыр. Ошо мәҡәләлә күтәрелгән проблемалар тураһында белгестәр ни әйтер икән?

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Нияз МӘЖИТОВ, тарих фәндәре докторы, археолог:** Авторҙың яҙғандарын уҡып, тарихҡа битараф булмаған кешеләрҙең булыуы менән шатландым. Бында, ысынлап та, хәҙерге Көйөргәҙе районындағы археологик ҡомартҡыларҙың күплеге тураһында һүҙ бара. Шул уҡ ваҡытта районда ошо хазиналарҙың төрлө сәбәптәр арҡаһында емерелеүе, юғалыуы, урланыуы, билдәһеҙ кешеләр тарафынан ҡаҙылыуы борсоуға һалды. Тимәк, районда археологик ҡомартҡылар тейешле кимәлдә һаҡланмай, был өлкәлә етешһеҙлектәр бар.

Яҙылғанды анализлап, шуны әйтергә була: теге йәки был тарихи объект тураһында хатта телдән генә әйтелгән һәр бер факт та айырым тикшерелергә тейешле мөһим археологик сығанаҡ ул. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа беҙ ошондай фактарға иғтибар итмәй башланыҡ. Шул арҡала тарихи факттар юғала. Минең фекеремсә, әлеге автор яҙғандар эҙенән беҙҙең профессионал археологтар мотлаҡ тикшереүҙәр үткәрергә тейеш.

Алтмыш йыл тирәһе мин археологик тикшеренеүҙәр менән шөғөлләнәм, бер ҡасан да бындай мәғлүмәттәрҙе урап үтмәнем. Һәр береһе буйынса айырым эҙләнеүҙәр алып барҙым. Яҡын арала Көйөргәҙе районына үҙем бара алмаһам, башҡа археологтарҙың ошо табылдыҡтарҙы өйрәнеп, тикшереп ҡайтыуын хәстәрләйәсәкмен. Көндәр йылынғас та йә Башҡорт дәүләт университетынан, йә Мәҙәниәт министрлығынан кешеләр йәлеп ителәсәк һәм ошо йүнәлештә экспедицияға ебәреләсәк. Бәлки, шунда табылған табыштарҙың ҡайһы берҙәре ауыл, мәктәп музейында булһынмы, башҡа урындамы, һаҡланалыр ҙа әле. Улар беҙгә тикшеренеүҙәр алып барғанда бик ныҡ ярҙам итәсәк. Табылдыҡтарҙы юғалтырға, берәйһенә һатырға, бирергә ярамай. Бигерәк тә ҡомартҡыларҙың "ҡара" археологтар ҡулына эләгеүенән һаҡ булырға кәрәк. "Ҡара" археология беҙҙә тыйылған. Был эште алып барыусылар закон буйынса яуаплылыҡҡа тарттырылырға тейеш. Ләкин улар артынан һәр саҡ өлгөрөп булмай. Халыҡтың да уяу булыуы кәрәк был осраҡта.

Дөйөм алғанда, Көйөргәҙе районында ғына түгел, бар республикала, илдә ошондай археологик хазиналарҙы һаҡлау, өйрәнеү өсөн күп эшләргә кәрәк әле.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр



Таҡыя (һүрәт) - ярым шар формаһындағы, ситтәре һәм уртаһы ҡыҙыл туҡыма менән телгән киндер башлыҡ. Уның өҫтө тулыһынса көмөш тәңкәләр менән ҡаплана, ә аҫ яғы сукланып тора. Суҡтарҙың осона тәңкәләр тағыла. Башлыҡтың түбәһендә ике япраҡ кеүек сулпылы тимер суғырмаҡ эләнә; уны тирәләп өс рәт мәрйен тегелә, ә ситтәренән, суҡтарҙың өҫтөнән биҙәк баҫылған тимер ҡаштар беркетелә. Тәңкәләр араһына, кәләпүштәге кеүек, дүрт рәт шар формаһындағы төймәләр һәм көмөш шарҙар баҫыла.



Таҡыяға тегелгән һәм арҡаға төшөп торған туҡыма (һүрәт) кәләпүштәге кеүек үк. Бары тик айырма шунда ғына: таҡыяның арҡа өлөшөндә уйым бар һәм ул башлыҡҡа ситтәренән генә тегелеп ҡуйыла.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш кейемен һүрәтләгәндә В. М. Черемшанский аҡ ҡалпаҡтарҙы ла иҫкә ала. Улар аҡ ептән бәйләнә һәм башҡа кейелгәс, өс-дүрт тапҡыр ҡаплана һәм уҡа сасаҡ йәки битлек кейеп бәйләп ҡуйыла.

Уҡа сасаҡ - ебәк эслекле суҡ (сасаҡ). Битлек - киң көмөш уҡа (8х30 см) кисәге. Ул ҡыҙыл ебәк эслекле, уға ҡалын бау бәйләнә һәм ул көмөш еп менән уратыла. Битлекте мәртәбәле башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡалпаҡ өҫтөнән генә түгел, яулыҡ өҫтөнән дә кейгән. Битлек уртаһына бик йыш көмөш тәңкәле сулпылы инәлек ҡаҙап ҡуйыла (һүрәт). Ғәйнә башҡорттары әйтеүенсә, битлекте бары тик оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар ғына кейгән. Уларға уны ауылдаштары билдәле бер йәшкә еткәс бүләк иткән. Уҡа сасаҡ менән, киреһенсә, ҡыҙҙар һәм йәш ҡатындар ҡулланған.



Башҡорт ҡыҙҙары, ғәҙәттә, йәйгеһен яланбаш йөрөй. Ҡатын-ҡыҙҙар һәм оло йәштәге ҡатындар ҙур ситса яулыҡ ябына. Көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш ҡатын-ҡыҙының ике төр яулығы була: һыңар яулыҡ, баш бәйҙәмес тип аталғандары менән улар маңлай сәсен ҡаплап, остарын елкәлә бәйләп ҡуя, ҡуш яулыҡ менән иһә түбәләрен ҡаплайҙар. Ҡуш яулыҡ эстән төҫлө ебәк туҡыма һәм көмөш тәңкәле уҡа менән тегелгән. Уны, баштан шыуып төшмәһен өсөн, махсус бау ярҙамында эйәк аҫтына бәйләп ҡуялар. Ғәҙәттә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҙур булмаған яулыҡ ябынып йөрөй. Уны улар ике осонан эйәк аҫтына бәйләп ҡуя. Ошо яулыҡ өҫтөнә икенсеһе, ҙурырағы, бик йыш баҙарҙан алынған йәки үҙҙәре бәйләгән дебет шәл ябынылған. Үҙҙәре һуҡҡан шәл нигеҙҙә Башҡортостандың көньяғында һәм Уралдың көньяҡ өлөшөндә ҡулланылған. Көньяҡ Урал тауҙарында һәм уның итәгендә шәл ролен баштан аша ҡапланған елән үтәгән.

✓ *Элек үҙем дә тәмәке тарта инем. Бер нисә тапҡыр ташлап ҡараным - ҡабат башлайым да ҡуям. Ә инде тәмәкегә ҡаршы закон ҡабул ителгәс, өҫтәүенә, уның авторы үҙем булғас, эште үҙемдән башларға тура килде.*



# БАШҠАЛАРҒА

## үҙем

**Медицина фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы Венер Сәхәүетдиновтың китабы тап шулай атала. Бар булмышын кеше сәләмәтлеген, ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыуға бағышлаған алтын ҡуллы хирург, бик күп табиптарҙың уҡытыусыһы һәм остазы, ысынлап та, үҙенең тормош юлы хаҡында шулай тип әйтергә хаҡлы. Сөнки ул Аллаһы Тәғәлә үҙе иң мөһим тип һанаған өс йүнәлештең (белем биреү, дауалау һәм хөкөм итеү) икеүһен бер юлы бына нисәмә йылдар инде параллель рәүештә алып бара: студенттарға белем бирә һәм ауырыуҙарҙы дауалай. Шул уҡ ваҡытта уның әлегәсә балаларса саф күңелле булыуына, сабыйҙар кеүек һәр нәмәгә шатлана белеүенә, һәр нәмәнән матурлыҡ табыуына һоҡланырға ғына ҡала. Уның эш бүлмәһендәге аҡ халатлы, ҡыҙыл тәреле ҡалпаҡ кейгән төрлө хайуандарҙың (һәр береһе - доктор Айболит!) үҙенсәлекле коллекцияһы ла быны раҫлай. Медицина аҡһаҡалы Венер Ғәзиз улы СӘХӘҮЕТДИНОВ менән осрашып, уның тормош юлындағы айырыуса яҡты янып, үҙенсәлекле эҙ ҡалдырған мәлдәрҙе барланыҡ.**

### Дүрт "кит"

Бөгөн медицинаның тармаҡтары бик күп булһа ла, ул барыбер ҙә дүрт "кит"ка нигеҙләнә. Шуларҙың иң тәүгеһе - гинекология һәм акушерлыҡ. Сөнки гинекология ул ҡатын-ҡыҙҙарға - әсәйҙәргә, буласаҡ әсәйҙәргә, донъяға яңы кешене тыуҙырыусыларға, уларҙың һаулығына бәйле өлкә. Икенсе урында хирургия тора. Әлбиттә, мин уны беренсе урынға ҡуйыр инем, әммә көслө зат вәкиле булараҡ та, табип булараҡ та ҡатын-ҡыҙға оло ихтирам менән ҡарайым һәм шуға ла гинекологияны тәүге урынға ҡуям. Ләкин медицинала бер генә өлкәне лә хирургиянан башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Шул уҡ гинекология булһынмы, стоматология, кардиология һәм башҡа бик күп "ология"лар хирургия менән тығыҙ бәйләнгән. Хәтта оператив исул менән хәл-торошто онкологияға алып барып еткермәйенсә, кешенең ғүмерен һаҡлап алып ҡалырға мөмкин. Көн һайын күпме юл-транспорт фажиғәләре, башҡа бәхетһеҙлектәр булып тора. Уларҙа ҡатнашыусыларҙың күпселегенең ғүмере хирургтарға бәйле.

Өсөнсө "кит" - терапия. Фән булараҡ, ул эске ағзалар ауырыуҙарын өйрәнеүҙе үҙ эсенә ала. Терапевт сирле менән уның хәл-торошо тураһында әңгәмәләшкәндә үк мөрәжәғәт итеүсенең ниндәй ағзаһына иғтибар итергә, уны артабан ниндәй белгескә ебәрергә һәм ниндәй һөҙөмтә көтөргә кәрәклеген күреп торорға тейеш. Шуға күрә лә улар медицинала булдырылған системаның беренсе звеноһы булып тора ла инде. Дүртенсеһе - гигиена. Уның төрлө бүлектәре бар. Әммә гигиена тигәндә беҙ тәү сиратта сәләмәтлек тураһындағы фәнде, кешенең хеҙмәтен һәм ялын дөрөҫ итеп ойоштороу, ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, кешеләрҙең һаулығын һаҡлау өсөн уңайлы шарттар булдырыуҙы күҙаллайбыҙ.

### Иң беренсе хирург

Минеңсә, иң беренсе хирург - ул Аллаһы Тәғәлә үҙе булған. Сөнки Ожмах баҡсаһы булдырып, ойошҡан ҡандан Әҙәмде барлыҡҡа килтергәс, уның яңғыҙына был баҡсала күңелһеҙ икәнен күреп, уға иптәш хаҡында уйлай башлай. Һуңынан инде Әҙәмдең 12-се ҡабырғаһынан гүзәл затты - Һауаны яралта. Уйлап ҡараһаң, кәкере ҡабырғанан шундай матурлыҡты, илаһилыҡты, нәзәкәтлекте тыуҙырыу өсөн күпме операциялар эшләргә тура килгәндер Хоҙайға? Бөгөн дә ғүмерҙәрен ҡотҡарып ҡалған хирургтарҙы пациенттар Алла кеүек күрә.

Әлегә тиклем хирургияның һөнәрме, фәнме, әллә сәнғәтме икәнлеге хаҡында бәхәс тыуып тора. Теләһә ниндәй оҫта кеүек уҡ, хирург хирургик ҡоралдар менән оҫта эш итә белергә, түҙемле, сабыр һәм тәүәккәл дә булырға, кәрәк икән, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып ҡарар ҡабул итә белергә лә тейеш. Икенсе яҡтан, хирургия - ул фән, сөнки бары тик көндәлек эшендә анализлау, белемеңде даими камиллаштырыу юғары тиҙлек менән үҫешкән йүнәлеш менән бергә атларға, артта ҡалмаҫҡа мөмкинлек бирә. Хирургия - ул сәнғәт. Сәнғәттә рәссам йәки скульптор бер төрлө әҫәр ижад итә алмаған кеүек, үҙ ғүмерендә хирург нисәмә мең операция яһамаһын, уларҙың береһе лә икенсеһен ҡабатламай. Сәнғәттәге кеүек хирургтың да оҫталығы көндәлек ныҡышмал, фиҙаҡәр хеҙмәт аша камиллаша.

Хирургия - физик һәм рухи көсөргәнеш талап иткән хеҙмәт. Әгәр дауаханала бер генә хирург бар икән, уны башҡа бер генә табип та алмаштыра алмай. Шулай уҡ хирург тәүлектең теләһә ниндәй ваҡытында ла, ҡайҙа булыуына, нимә менән шөғөлләнеүенә ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт ашығыс саҡыртыуҙарға әҙер булырға тейеш. Даими рәүештә шундай йәшәү рәүеше уларҙың сәләмәтлегенә лә йоғонто яһамай ҡалмай, әлбиттә. Бер операция ваҡытында ғына бер нисә килограмм ауырлыҡ юғалтырға мөмкиндәр. Хирургтарҙың 60 проценты пенсия йәшенә етмәйенсә йә инсульт, йә миокарда инфаркты кисереп, яҡты донъя менән хушлаша.

### Халыҡ "хеҙмәтсеһе"

Өс саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты булып эшләү дәүеремдә халыҡ һаулығы һәм ғәмәли медицина өлкәһенә ҡағылышлы 8 закон ҡабул ителеүен үҙемдең иң ҙур уңышым тип иҫәпләйем. Сөнки уларҙың ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, тәмәке тартыуҙы тыйыу, шәхси медицина эшмәкәрлеге алып барыу, опекунлыҡ һәм попечителлек, ир-ат һаулығы тураһындағылары Рәсәй Дәүләт Думаһынан 5 йыл алда ҡабул ителде һәм федераль закон һүҙмә-һүҙ тигәндәй Башҡортостан законынан күсереп эшләнде.



Опека һәм попечителлек тураһындағы закон беҙҙә балалар йорттарын ябыу, уларҙағы балалар һанын кәметеү мөмкинлеге бирҙе. Һәр ил өсөн балалар йорттары булыуы - хурлыҡ ул. Йәмғиәттең цивилизациялылығы ике күрһәткес буйынса билдәләнелә: балаларға һәм ололарға мөнәсәбәт. Был теләһә ниндәй илдең именлеген лакмус ҡағыҙы кеүек асыҡлай. Балалар ҙа, ололар ҙа ғаиләлә йәшәргә тейеш. Борон-борондан башҡорттарҙа етем балаларҙы ситкә ебәреү булмаған. Мәҫәлән, олатайым 14 балаһы өҫтөнә вафат булған ҡустыһының өс балаһын алып ҡараған. Депутат коллегаларымды ошо закон ҡабул ителһә, балалар йорттары һаны кәмейәсәк, тип инандырҙым. Шулай булып сыҡты ла.

Элек үҙем дә тәмәке тарта инем. Бер нисә тапҡыр ташлап ҡараным - ҡабат башлайым да ҡуям. Ә инде тәмәкегә ҡаршы закон ҡабул ителгәс, өҫтәүенә, уның авторы үҙем булғас, эште үҙемдән башларға тура килде. Медицина университеты студенттарына һәм хеҙмәткәрҙәренә лә ҡаты талап ҡуйылды. Бер ни тиклем ваҡыттан инде вуз территорияһында тәмәке быҫҡытыусы бер генә талип та, хеҙмәткәр ҙә күренмәне. Ә был закон проектын парламентҡа сығарғас, нимәләр генә эшләмәнеләр! Телефондан аноним шылтыратыуҙар, янауҙарҙың иҫәбе-һаны булманы. Әммә иң аптыратҡаны прокуратуранан килгән хат ине. Унда аҡҡа ҡара менән закон проектының кеше хоҡуҡтарына тура килмәүе яҙылғайны. Йәнәһе, тәмәке тартыусыларҙың хоҡуҡтары боҙола. Һуңынан шундай уҡ йөкмәткеле хат Волга буйы федераль округы прокуратураһынан да килде. Әммә хәл-торошто республиканың ул ваҡыттағы Президенты Мортаза Рәхимов оҫта итеп бороп ебәрҙе: ултырыштарҙың береһендә тәмәке тартыуҙы тыйыу тураһындағы закондың бер ай эсендә өҫтәлендә ятырға тейешлеген белдереп, ҡәтғи бурыс ҡуйҙы.

Закон депутаттар тарафынан бер тауыштан ҡабул ителде һәм эшләй башланы. Ә РФ Дәүләт Думаһында ошондай закон биш тапҡыр кире ҡағылды. Һуңынан дүртме, бишме субъектта аналогик закондар әҙерләй башлағас, Дума депутаттары ла, ниһайәт, эш башланы. Әммә бының өсөн тәүҙә беҙҙең законды ғәмәлдән сығарырға кәрәк ине. "Мөһим" сәбәп таптылар: "...Рәсәй Федерацияһының бюджет проектында махсус тәмәке тартыу бүлмәләрендә вентиляция ҡоролмаларын ҡуйыуҙы финанслау ҡаралмаған, шуға күрә һеҙҙең законды ғәмәлдән сығарабыҙ". Һәм күп тә тормай, һүҙмә-һүҙ, өтөрөнә тиклем Башҡортостан законын ҡабатлаған Федераль закон әҙерләп ҡабул иттеләр.

Йәки бына ир-ат һаулығына ҡағылышлы закондың әһәмиәтен закон ҡабул ителгәс кенә аңлай башланылар. Ғәмәлдә, Рәсәйҙәге 6 миллиондан ашыу түлһеҙ парҙың 60 процентында күберәк осрағында ир-ат ғәйепле. Нилектән шулай килеп сыға һуң? Сөнки ҡыҙҙарҙы буласаҡ әсә тип бала саҡтан уҡ тейешле күҙәтеүгә алалар, ә малайҙарҙың һаулығына иғтибар бирелмәне һәм йәш әсәләргә малайҙарҙың ги-

***Өс саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты булып эшләү дәүеремдә халыҡ һаулығы һәм ғәмәли медицина өлкәһенә ҡағылышлы 8 закон ҡабул ителеүен үҙемдең иң ҙур уңышым тип иҫәпләйем. Сөнки уларҙың ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, тәмәке тартыуҙы тыйыу, шәхси медицина эшмәкәрлеге алып барыу, опекунлыҡ һәм попечителлек, ир-ат һаулығы тураһындағылары Рәсәй Дәүләт Думаһынан 5 йыл алда ҡабул ителде һәм федераль закон һүҙмә-һүҙ тигәндәй Башҡортостан законынан күсереп эшләнде. Опека һәм попечителлек тураһындағы закон беҙҙә балалар йорттарын ябыу, уларҙағы балалар һанын кәметеү мөмкинлеге бирҙе. Һәр ил өсөн балалар йорттары булыуы - хурлыҡ ул. Йәмғиәттең цивилизациялылығы ике күрһәткес буйынса билдәләнелә: балаларға һәм ололарға мөнәсәбәт.***

***✓ Һуңынан асыҡланыуынса, Башҡортостан хажиҙары араһында беҙҙән башҡа тағы ла 5 табип булған икән. Әммә улар сәфәр барышында был турала ләм-мим өндәшмәне.***

# ЮЛ ЯҠТЫРТЫП...

## янам!

гиенаһы хаҡында белем биреүсе бер генә китап та, әсбап та булманы. Үсмерҙәр беренсе тапҡыр военкоматта тулы тикшереү үтәләр ине, ә инде армиянан ҡайтҡанда күптәре "эшлекһеҙ" була. Хәҙер иһә, законға ярашлы, малайҙар планлы рәүештә тикшерелергә тейеш. Тағы шуны әйтеп китеү мөһим: уҙған быуаттың 50-60-сы йылдарында профессорҙарыбыҙ беҙҙе, ирҙәрҙең енес ағзаһының 4-6 сире бар, тип уҡытһа, хәҙер инде был һанды 40 тип белдерәләр! Минең маҡсатым - балаһыҙ ғаиләләр һанын кәметеү һәм йәмғиәт иғтибарын ошо етди проблемаға йәлеп итеү ине. Юҡһа, икенсе бала тыуыуға күпме генә аҡса түләмәһендәр, Рәсәй демография мәсьәләһен оҙаҡ йылдар хәл итә алмаясаҡ, бәлки, бөтөнләй хәл итмәҫ. Әйтәйек, статистика мәғлүмәттәренә күҙ һалһаҡ, илдә халыҡ һаны йыл һайын 600-700 меңгә кәмей. Ә бына әгәр түлһеҙ тип иҫәпләнгән һәр ғаилә ике бала ғына тапһа ла, халыҡ һаны 12 миллионға артыр ине. Ир-ат һаулығы тураһында закон әҙерләгәндә тап ошо күҙлектән сығып фекер йөрөттөм дә инде. Сөнки буласаҡ яугир һәм ил һаҡсыһы үҙенең Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан төп бурысын үтәргә һәм үҙенән һау-сәләмәт тоҡом ҡалдырырға тейеш.

Шәхси медицина эшмәкәрлеге тураһында законды ҡабул итеү медицинаны түләүле итеүгә бер аҙым түгелме, тиһегеҙ инде? Ә бына уйлап ҡарағыҙ: бөгөн табиптың эш хаҡы 6,5 мең һум. Статистика мәғлүмәттәре күрһәткән 40 мең һумды эшләр өсөн уға күпме дежурство алырға тура килә? Ә шәхси медицина эшмәкәрлеге медиктарға түләүле хеҙмәт күрһәтеү мөмкинлеген асты. Уларға ла ғаиләһен ҡарарға, йәшәргә, кейенергә, балаһын уҡытырға кәрәк бит.

Тағы шуны әйтеп китер инем: элек, СССР заманында "СССР-ҙың халыҡ табибы" тигән исем булдырылғайны. Халыҡ исеме юҡҡа ғына өҫтәлмәй, тимәк, уға халыҡ ышана, уға мөрәжәғәт итәләр, унда яҡлау табалар. Әлбиттә, медицина өлкәһендә лә профессорҙар, атҡаҙанған, отличник исемдәрен алыусы хеҙмәткәрҙәр бик күп, әммә халыҡ улар араһынан исемдәрен телдән төшөрмәй һөйләгәндәре бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Бына, мәҫәлән, халыҡ артисы, халыҡ яҙыусыһы, халыҡ шағиры тигән исемдәр бар. Улар халыҡтың күңелендә йөрөгән уй-фекерен, моңон халыҡҡа еткерә, халҡына хеҙмәт итә. Ундай табиптар ҙа бар ул, әммә Рәсәй Хөкүмәте әлегә тиклем бындай исемде булдырыу тураһында закон ҡабул итергә ашыҡмай.

### Дин юлында

1997 йылда Башҡортостан мосолмандары менән хаж ғәмәлен үтәнем. Ул хаҡта күп тапҡырҙар һөйләгәнем дә, яҙғаным да булды инде. Шуға иң мөһим мәлдәргә генә туҡталып китмәксемен, сөнки был сәфәр минең тормошомда ҙур роль уйнаны. Беҙҙең төркөмдә 21-се дауахананың табибы Роза Заһит ҡыҙы ла бар ине. Унын менән беҙ сәфәрҙең башынан аҙағына тиклем үҙебеҙҙең табиплыҡ бурысын намыҫ менән атҡарҙыҡ. Климат алмашыныуҙан да, башҡа сәбәптәр менән дә күптәрҙең хәле ҡапыл ғына насарайып киткән осраҡтарҙа тиҙ ярҙам күрһәттек. Хатта үҙебеҙ алып барған кәрәкле дарыуҙар бөткәс, уларҙы урындағы аптеканан үҙ аҡсабыҙға һатып алырға ла тура килде. Һуңынан асыҡланыуынса, Башҡортостан хажиҙары араһында беҙҙән башҡа тағы ла 5 табип булған икән. Әммә улар сәфәр барышында был турала ләм-мим өндәшмәне.

Хаждан ҡайтҡас, хаж ҡылыусылар менән бергә, уларҙың иҫәбенә, мотлаҡ рәүештә бер

***Бер заман медицина институтында ла ауыл балаларын ҡабул итеү имтихандарына үткәрмәҫкә тырышыу, улар уҡырға ингәс тә, беренсе курста уҡ имтихандарын тапшыра алмау кеүек күренештәр күбәйә башланы. Был мәсьәләне йыйылышҡа сығарып тикшергәндә ҡапыл башыма шундай уй килде: "Фән кандидаттарынан кем ҡаланыҡы, баҫығыҙ", - тием. Өс кеше тороп баҫты. "Ә хәҙер кем ауылдан килеп уҡып, фән кандидаты булған, шулар баҫһын", - тием. 46 кеше тороп баҫты. "Ауылдың нимә икәнен аңланығыҙмы инде, шуға күрә уны яратыуығыҙҙы һәм ихтирам итеүегеҙҙе һорайым. Бер аҡыллы китапта әйтелгәнсә, икмәк биргән ҡулдарҙы үбергә кәрәк!" - тип ҡаты ғына итеп киҫәттем.***

нисә медикты ебәреү кәрәклеге тураһындағы мәсьәләне күтәреп сыҡтым, һәр дәүләт үҙенең гражданлары тураһында хәстәрлек күрергә, уларҙың именлеген тәьмин итергә бурыслы. Был тәҡдим асыҡ килеш ҡалманы, етәкселек тарафынан да иғтибарға алынды һәм хәҙер йыл һайын хаж ҡылыусылар араһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан һәм ир-егеттәрҙән бер медик мотлаҡ була.

Хаж ул шундай урын - бәғзе мосолмандар унда һуңғы төйәген табыр өсөн әҙерләнеп бара һәм шул ерҙә ғүмерҙәре бөткәндәр бәхетле тип һанала. Әммә һуңғы минуттың төрлө шарттарҙа һәм төрлөсә булыуы ла мөмкин. Минаға барып Шайтан бағанаһына таш ырғытыу йолаһын үтәргә тейеш инек. Әммә ғәрәптәр бер ваҡытта ла ваҡытында йөрөмәйҙәр һәм беҙҙе алып бара торған автобус та күпкә һуңлап килде. Шул сәбәпле тәғәйен урынға ваҡытында бара алманыҡ. Ә инде күп тә тормаҫтан юлдағы ике бейек ҡая араһынан ҡара төтөн күтәрелгәне күренде. Яйлап ул ҡуйыра барҙы һәм тиҙ ярҙам машиналары себен кеүек оса башланы. Баҡтиһәң, Минала янғын сыҡҡан һәм хажиҙар уның уртаһында ҡалған икән. Күрәһең, Аллаһы Тәғәлә үҙе беҙҙе оло фажиғәнән һаҡлап алып ҡалғандыр инде. Һуңынан дауаханаларҙа бер нисә көн янғындан зыян күреүселәргә ярҙам итеп тә йөрөнөм. Ләкин урындағы табиптар мине тиҙ генә "иҫәпләп сығарҙы", һеҙ эшләргә түгел, хажға килгәнһегеҙ, тип, рәхмәт әйтеп, артабанғы ярҙамымдан баш тарттылар.

Шундай мәхшәрҙе үҙ күҙҙәрем менән күргәс, Алла бойорһа, ҡайтып, тыуған ауылымда мәсет һалдырырмын, тигән ниәт әйткәйнем. Шөкөр, әсәйемдең исеме менән аталған "Фатима" мәсетен төҙөп ҡуйҙым. Уның коммуналь хеҙмәттәр буйынса сығымдарын, һалымды үҙем түләп торам. Рәхмәт, Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһы директоры Рәмис Дәүләтбаев менән ауылдашым, теш табибы Ришат Әхмәҙиев ярҙам итә. Аҙ булһа ла, кеше йөрөй.

Хажға барып, мин мосолманлыҡтың ғына түгел, башҡа диндәрҙең дә, хатта ниндәйҙер кимәлдә мәжүсилектең дә бөйөклөгөнә инандым. Сөнки әгәр кеше бер кемгә лә, бер нәмәгә лә ышанмай икән, ул хайуанға әүерелә, уның өсөн бары тик инстинкттар ғына ҡала. Ә инде ҡурҡыу, яуаплылыҡ, кеше хәленә инеү һ.б. сифаттарға эйә түгел икән, ул йәмғиәттә йәшәй алмай - урлаша, үлтерә башлай, ҡанундарға буйһонмай, һәм йәмғиәтте унан азат итергә кәрәк. Барлыҡ диндәрҙең дә нигеҙендә бер үк принциптар ята - үҙеңде мөхиттең бер өлөшө итеп тойорға өйрәтеү, урлашыу, үлтереү, башҡа насар ҡылыҡтарҙан алыҫ тороу һ.б.

Эйе, хажи булғас, яратҡан шөғөлдәремдең береһе булған һунар ҡомарынан баш тартырға тура килде. Ә инде мосолман донъяһына, уның талаптарына мин һәр саҡ табип күҙлегенән ҡарайым. Рух таҙалығы, тән сафлығы унда берберeһе менән тығыҙ бәйләнгән. Әммә үҙемде башҡалар кеүек үк дингә фанаттарса бирелгән кешемен тип әйтә алмайым. Ислам динен, уның ҡанундарын ихтирам итәм, Аллаһы Тәғәләнең барлығына һәм берлегенә инанам, әммә, тәү сиратта, иман кешенең үҙендә, уның күңелендә булырға тейеш, тип иҫәпләйем.

### Ҡаланы ауыл һаҡлай

Ни өсөндөр элек-электән ҡала халҡы тарафынан ауыл кешеһе кәм итеп ҡабул ителә. Бер заман медицина институтында ла ауыл балаларын ҡабул итеү имтихандарына үткәрмәҫкә тырышыу, улар уҡырға ингәс тә, беренсе курста уҡ имтихандарын тапшыра алмау кеүек күренештәр күбәйә башланы. Был мәсьәләне йыйылышҡа сығарып тикшергәндә ҡапыл башыма шундай уй килде: "Фән кандидаттарынан кем ҡаланыҡы, баҫығыҙ", - тием. Өс кеше тороп баҫты. "Ә хәҙер кем ауылдан килеп уҡып, фән кандидаты булған, шулар баҫһын", - тием. 46 кеше тороп баҫты. "Ауылдың нимә икәнен аңланығыҙмы инде, шуға күрә уны яратыуығыҙҙы һәм ихтирам итеүегеҙҙе һорайым. Бер аҡыллы китапта әйтелгәнсә, икмәк биргән ҡулдарҙы үбергә кәрәк!" - тип ҡаты ғына итеп киҫәттем. Ә инде имтихандар алырға республика райондарынан иң яҡшы уҡытыусыларҙы саҡырттым. Ул йылдарҙа медицина институтына уҡырға инеүселәрҙең нисбәте ҡала һәм ауыл халҡының нисбәтенә генә түгел, ә уларҙың милли составына ла пропорциональ ине. Шунан һуң вузда өлгәшмәү сәбәпле уҡыуҙан ебәреүҙәр ҡырҡа ҡыҫҡарҙы, ауылдан килгән егет-ҡыҙҙар уҡыу йортон лайыҡлы тамамлап, үҙҙәренең ауылдарына, райондарына таралышты. Тап бөгөн улар төрлө ҡалаларҙың, райондарҙың ғына түгел, республика дауаханаларының нигеҙен тәшкил итә, төрлө сит ил дауаханаларында эшләй.

Бөгөн ауыл халҡы ла ныҡ үҙгәрҙе. Кешелә көнсөллөк тигән насар сифат саманан ашты. Унан бер кем дә азат түгел. Элегерәк сәм өҫтөнлөк итһә, бөгөн - көнсөллөк. Берәйһе ҡайһы яғы менәндер айырылып тора икән, мотлаҡ уға зыян эшләргә тырышалар. Бер-беренә ярҙам, ихласлыҡ тигән нәмә онотола бара.

### Полиглоттар теле

Студенттар менән эшләп, шуны асыҡланым һәм аптыраным: улар буласаҡ зыялылар эйә булырға тейешле мәғлүмәттең 20 процентын да белмәй. Бөгөн инглиз телен белмәгән табиптың бер ниндәй әһәмиәткә эйә түгеллеген, ә инде ҡытай телен белеүсенең баһаһы тағы ла юғарыраҡ икәнен аңламайҙар. Шулай уҡ милли республикала йәшәп тә, аяҡ терәп татар йәки башҡорт телен уҡырға ҡарышҡан рус кешеһенең үҙен полиглот булыуҙан мәхрүм итеүен нисек аңлатырға? Был телдәрҙе белгәндә ул бер юлы 20 телдә һөйләшә алыр ине: ошо һәм уға яҡын телдәрҙә бөгөн 100 мендән ашыу төрөк, 8 миллион татар һәм башҡорт, 18 миллион ҡаҙаҡ, 6 миллион төркмән, шунса уҡ ҡырғыҙ, алтай, Молдова ғағауызы, Грузия ҡарасәйҙәре һ.б. һөйләшә һәм бер-береһен аңлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Венер Ғәзиз улына хирург булыу Аллаһы Тәғәлә тарафынан, тәбиғәттән бирелгәндер, моғайын. Уның тураһында, хатта отпускыһы ваҡытында ла ауыр операция үткәргән пациенттары эргәһенән китмәй, ауырыу аяғына баҫып дауахананан сыҡҡансы фәрештә кеүек һәр саҡ уны ҡурсалап тора, тиҙәр. Булыуы ла ихтимал, сөнки уның өсөн тәүге урында кеше тора. Сөнки ул, ысынлап та, башҡаларға юл яҡтыртып, үҙе яна торған шәхес.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**




Сәбиләһе менән матур ғына йәшәп алып киткән һымаҡтар ине башта. Ләкин ул аҡрынлап холҡон күрһәтә башланы. Бигерәк тә әсәһе ҡапылдан ғына үлеп киткәс, мыжыуҙары, юҡ-бар ғына сәбәптән тауыш сығарырға маташыуҙары йышайҙы. Холҡо шулай булғас, нишләһен инде, тип, Ғәрәфи ҡаршы өндәшмәҫкә, түҙергә тырышты. Эштән ҡайтып инһә, ҡатынының: "Уф, силос менән тиреҫ еҫе өйҙө алды, кейемдәргә һеңеп бөттө, балаға яҡын барма, "хушбуйыңды" уға ла һеңдерәһең", - тип, ҡыҙы янына яҡын ебәрмәҫкә маташыуҙары сығырынан сығара яҙа ине шулай ҙа. Айгөлө тел белә башлағас, "Атаң ҡәҡәс - барма эргәһенә", тип баланы тыйыуын, уныһының танауын сырыштырғылап, "Фу-у, ҡәҡәс!" тип янынан китә һалыуы ҡыҙын ҡосағына алып яратырға ынтылған атайҙың йөрәген семетмәй ҡалманы, әлбиттә. Ҡатынының ҡыланыштарына ҡарап, әллә балам менән минең араға ҡәртә ҡорорға маташа инде, тип уйлап та ҡуя ине Ғәрәфи. Уҡырға төшкәс, ҡыҙы берәй нимә һорарға тип атаһына өндәшкән саҡта әсәй кешенең: "Ул наҙан көтөүсе нимә белһен, кил үҙем аңлатам", - тип әйтеүҙәре, бала алдында башҡасараҡ та мыҫҡыллауҙары ул ҡәртәне ныҡ нығытҡандан-нығытты.

Үҫә төшкәс, Айгөлө әсәһе ыңғайына атаһына ҡысҡырырға ла тартынмай башланы. Ҡыҙының ҡылыҡтарына асыуланмай, минең "ҡәҡәс", наҙан, көтөүсе булыуыма бала ғәйепле түгел бит инде, тип уны аҡларға ғына тырышты Ғәрәфи. Нисек кенә булмаһын, ҡыҙын ысын күңелдән, бар йөрәге менән яратты, уның өсөн йәнен бирергә әҙер ине атай кеше. Айгөлө уҡырға ингәс, түбәһе күккә тейә яҙҙы уның. "Завферма Хызырҙың ҡыҙы ла, бухгалтер Мәҙинәнең улы ла буш ҡайтты, ә минең, ябай бер көтөүсенең балаһы уҡырға инде", - тип, ҡайһылай ҡыуанды ул. Маҡтанырға яратмаһа ла, башҡалар менән аралашҡанда юҡтан ғына һүҙҙе ҡыҙына борорға тырышты. Баланы уҡытып сығарыу өсөн, ай-һай, күп кәрәк. Ғәрәфи ҡураһындағы малдарын да ишәйтте, ҡош-ҡортон да күпләп аҫраны, үҙенсә бар көсөн һалып тырышты. Ҡыҙы эшләй башлағас, бер аҙ тын алып ҡалғайнылар, бына хәҙер туйы оло мәшәҡәт тыуҙырып, ыштанһыҙ ҡалдыра яҙҙы. Ярай, баш иҫән булһа, мал табылыр, иң мөһиме, туй кешесә, ҡыҙы теләгәнсә үтһен, тип күптән үҙ-үҙен йыуатып ҡуйғайны инде Ғәрәфи. Тырышҡас, күптәнге теләге тормошҡа ашып, ҡыҙына туй бүләге әҙерләй алды.

Бер каникулына ҡайтҡанда Айгөлдөң әсәһенә: "Беҙҙең күп ҡыҙҙар алтын алҡа таға, ә минеке копеечный", - тип әйткәнен ишетеп, ҡыҙына шул алтын алҡаны бүләк итеп, уны шатландырғыһы бик килгәйне. Ләкин, ҡатыны әйтмешләй, икмәк-тоҙлоҡ ҡына аҡса эшләп йөрөгән кешенең ундай алҡа алырлыҡ рәте юҡ шул. Яйы уйламаған ерҙән килеп сыҡты.

Бер ай самаһы элек быҙауҙарын таш сығарған карьер тугайында көтөп йөрөй ине, янына үҙен эшҡыуар тип йөрөткән Наил машинаһы менән килеп туҡтаны.

-Бына, таҡта яуҙы цехы төҙөргә ине иҫәп. Һин, Ғәрәфи ағай, ташты күп сығарған кеше, ҡайҙа арыуырағы барын беләһеңдер, - тип һораны ул күрешеп.

- Анау остараҡ матур сыға, түлкә тракторың менән әҙерәк тупрағын ышыртырһың, - тине Ғәрәфи ҡулын һуҙып күрһәтеп һәм һорап та ҡуйҙы. - Кешең бармы һуң таш сығарырҙай?

Наил елкәһен тырнап алды ла:

- Юҡ шул. Әллә үҙең сығарып бирәһеңме, хаҡын йәлләмәм, - тип, үтенесле ҡарашын уға төбәне.

Шунда ҡапыл ғына Ғәрәфиҙең иҫенә алтын алҡа төштө. Теге ваҡыт булдыра алманы, хәҙер ҡыҙының туйында бүләк итһә, ҡайһылай шәп буласаҡ.

- Ярай, сығарырмын, тик эш хаҡына матур ғына алтын алҡа алып бир, - тине ул.

- Килештек!.. Туҡта, туҡта, әллә любовницаң бармы, ағай? - тип һораны эшҡыуар.

- Уныһы кем була тағы? - тип һорауға һорау менән яуап бирҙе Ғәрәфи.

- Ну-у... беҙҙеңсә әйтһәң, һөйәркә инде... - Наилдең әйткәнен ишеткәс, ҡыҙарып уҡ киткәйне ул саҡ Ғәрәфи һәм ҡыҙына туй бүләге икәнен аңлата һалғайны.

Көн дә быҙауҙарын карьер янына ҡыуып, бер аҙна тигәндә Наилгә етерлек таш сығара алды ул. Уныһы ҡулына бик матур алтын алҡа менән, юллыҡ булыр, тип, бер аҙ аҡса ла тотторғас, ҡыуанысы эсенә һыйманы Ғәрәфиҙең. Туйында көтөлмәгән бүләк менән нисек ҡыуандырасаҡ ҡыҙын! Ҡатынына әйтмәй генә алҡаларҙы таҙа ҡулъяулыҡҡа төрөп, костюмының эске кеҫәһенә һалып ҡуйҙы ул.

Ғәрәфи башын күтәреп, ҡояшҡа күҙ ташлап алды. Уныһы кискә ауышҡан булһа ла көтөүҙе алып ҡайтырға иртәрәк. Шулай ҙа көтөүсе уйһыулыҡ буйлап таралышҡан быҙауҙарын йыйып алып, ҡайтыу яғына ыңғайлатты. Бер ҙә ҡыҙы менән кейәүен көттөргәһе килмәй ине уның. Әйткәндәй, кейәүен беренсе тапҡыр күрәсәк әле Ғәрәфи. Уныһы ҡулын ғына бирерме, әллә ҡосаҡлап күрешерме икән? Ҡайным, тиерме, әллә Мортазаның кейәүе һымаҡ, папа, тип өндәшерме? Ярай, ҡайһылай әйтһә лә риза, бары тик уларҙы ситкә ҡаҡмай, ҡыҙы менән бер-берәһен ихтирам итеп, матур йәшәһендәр.

Бына ошолай ат эйәрендә бәүелә-бәүелә йөрөгәндә Ғәрәфи "Их, улым булып, уны алдыма ултыртып йөрөтһәм ине", тип хыяллана ине гел. Бер саҡ Сәбиләһенә: "Берәй малай табып бирәһеңме әллә?" - тип тә өндәшкәйне. Ҡатыны күҙҙәрен аҡайтып ҡарап: "Һиңә оҡшап тыуһа, нишләрһең, бер көтөүсе лә башымдан ашҡан!" - тигәс, ҡабат ул турала һүҙ ҡуҙғатманы. Хоҙай насип итһә, ҡыҙы берәй ейән бүләк итер ҙә, шуны ултыртып йөрөтөр әле.

Ғәрәфи быҙауҙарын ялан ҡәртәгә индереп япты ла, күк бейәһен шунда уҡ тышап ҡалдырып, йүгәнен һелтәй-һелтәй, өйөнә ашыҡты. Ҡапҡалары алдындағы ҡояшта ялтырап торған ҡара төҫтәге бейек машинаға ултырып китәсәк көтөүсе Ғәрәфи! Ауылдаштарының һәр береһе ҡапҡа алдына сығып, уларҙың киткәнен ҡарап ҡалһа ине лә бит, тик урамда һирәк-мирәк кенә кеше күҙгә ташлана. Яҡын килеп, машинаның тәҙрәләре тоноҡландырылып, үтә күренмәле булмауы күҙенә сағылғас та, Ғәрәфиҙең кәйефе ҡырыла биреп ҡуйғайны ла, шунда уҡ, ярай, күрһәләр - күрерҙәр, күрмәһәләр - ишетерҙәр, тип, үҙ-үҙен тынысландыра һалды.

Ҡапҡанан инеп барғанда ҡаршыһына ҡулына ике ҙур сумка тотоп сығып барған таҙа кәүҙәле егет осраны. Ғәрәфи: "Кейәү ошомо икән?" - тип уйлап та өлгөрмәне, уныһы: "Привет, как дела?" - тип эргәһенән үтеп тә китте. Артынан уҡ пакеттар күтәргән Айгөлө сығып килә ине.

-Сәләм, атай. Таныш бул, кейәүең, - тип багажнигын асып булашҡан егеткә ымланы. Ләкин кейәүҙең танышырға уйында ла юҡ ине шикелле, сумкаларын багажнигына урынлаштырҙы ла, сепрәк алып, машинаһының тәҙрәләрен һөртөргә үк керешеп китте.

Ғәрәфи, былар юлға сығырға уҡ әҙерләнә, мин дә көттөрмәйем, тип, өйгә лә инеп тормай, йүгерә-атлай мунсаға инеп китте. Таҙа эске кейемдәрен иртән уҡ әҙерләп, мунса соланына һалып киткәйне, тиҙ генә сайҡанып, шуларҙы кейә һалып та сыҡты. Юлға әҙерләнеп алған Сәбиләһе уны солан ишеге янында көтөп тора ине.

- Мин хәҙер... - тип өйгә инергә ынтылған ирен ул беләгенән тотоп туҡтатты.

- Ни бит әле, Ғәрәфи... - тине ул күҙҙәрен йәшерә биреп, бығаса ишетелмәгән ғәйепле тауыш менән.

Ғәрәфи "Нәмә, ни?" тип һорап та өлгөрмәне, эргәләренә Айгөл килеп баҫты.

- Әсәй, әйтмәнеңме ни һаман? - тине лә, Сәбиләнең "юҡ" тигәнде аңлатып башын һелккәнен күргәс, матур, йәшел күҙҙәрен Ғәрәфигә төбәне. - Аңла, атай, шундай дәрәжәле ҙур кешеләр алдында үҙемде позорит итеп, ауыл мужигын, көтөүсене, төп ҡоҙағыҙ, тип таныштыра алмайым бит инде. Һине Зариф ағай алмаштырып торор...

Ҡыҙының ни әйткәнен башта аңламай торҙо Ғәрәфи. Аңлап алғас, күҙ алдары ҡараңғыланып, тамағына оло төйөн килеп тығылды. Сәбиләһенең күҙҙәрендә йәш бөртөктәре ялтырауын да, ғәйепле ҡарашын ташлап, артына боролоп ҡарай-ҡарай сығып барыуын да томан аша ғына шәйләп ҡалғандай булды. Бары иреңдәре генә: "Ярай, улайһа..." - тип ҡыбырҙаны.

Машина ҡыҙҙырған тауышты ишетеү Ғәрәфиҙе ҡапыл айнытып ебәрҙе. "Ах, бүләгем!" тип ул ҡапыл өйгә ташланды. Костюмы кеҫәһенән алтын алҡалар төрөлгән ҡулъяулыҡты ала һалып, йүгереп урамға сыҡҡанда машина ҡуҙғалып киткәйне инде. Ғәрәфи ҡулын болғай-болғай артынан йүгерһә лә, уға иғтибар итеп, машинаны туҡтатыусы булманы.

- Ҡыҙыма, бәпесемә, алтыныма бүләгемде тапшыра алманым бит... - тип өҙгөләнде Ғәрәфи, күҙенән сөбөрләп аҡҡан күҙ йәштәрен алтын алҡа уралған ҡулъяулыҡ менән һөртә-һөртә...

**(Аҙағы. Башы 15-се һанда).**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ДОНЪЯ ҺӘР САҠ...

## ике яҡлы

- Оҙон телдән баш ауырый, әсеһенән күңел әрней.
- Көнсөл кеше - тере мәйет, үҙен-үҙе утлы ситлеккә бикләй.
- Донъя ғәләмәте бәреп-һуҡҡылаһа ла үҙең булып ҡал: оҙаҡ хәтерләрҙәр.
- Ғүмер кисереү - сәнскеле үлән өҫтөндә йөрөүгә, тулҡындарҙа батып-сумыуға тиң.
- Донъя ул ике яҡлы: бер миҙгеле гел шатлыҡ килтерһә, икенсеһе борсоу, уттарға һала.
- Дуҫты ла, дошманды ла уртаса ҡабул ит: дуҫ - дошманға, ә дошман дуҫҡа әйләнеүе бара.
- Ысын дуҫ - еҫле май, ялғаны - тотәгән усаҡ.
- Яңылышыу ҙа онотоу - яуапһыҙҙың "һөнәре".
- Аманатҡа хыянат - йүгерек ҡулдың "кәсебе".
- Ауыҙындағы һүҙгә генә һин эйә, ауыҙҙан сыҡтымы - ил эйә.
- Алдашма, ике йөҙлөләнмә - ихтирамһыҙ булырһың; әрләшһәң - ҡәҙерһеҙгә әйләнерһең.
- Кешенән сүп эҙләмә, күҙеңдәгеһен алып ташла.
- Яңғыҙ кеше - китек күңел.
- Аҙманға - ил, ялманға ай юҡ.
- Һәр әҙәм донъяны үҙ булмышына ярашлы күрә.
- Әҙәмде ураткан донъя - күңеле көҙгөһөнөң сағылыш ул.
- Затлы кейем эсендә "шәүлә" генә йөрөргә лә мөмкин.
- Дөрөҫ йәшәү - күңелде дөрөҫ уйҙар менән тултырыу.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

РУХИӘТЕБЕҘ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан яҙыусылары сираттан тыш ҡорға йыйылып, өс кандидат - яҙыусы, драматург Наил Ғәйетбай, "Һәнәк" журналының баш мөхәррире Рәлиф Кинйәбаев, "Бельские просторы" гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары Игорь Фролов кандидатуралары араһынан Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесен һайланы. Йыйылышҡа Союзға ингән 227 яҙыусының 169-ы килде, һайлауҙа 155 әҙип ҡатнашты.**

# ЯҘЫУСЫЛАРЫБЫҘ...

## яңы рәйес һайланы

Яҙыусылар ҡоро һәүетемсә генә барҙы, рәйес һайлау ҙа тыныс үтте. Уның ҡарауы, күптәрҙе трибунанан яңғыраған ҡайһы бер сығыштарҙағы факттар һиҫкәндерҙе. Әйтәйек, проза һәм публицистика секцияһы рәйесе Сабир Шәрипов прозала "аяҡ менән" яҙыусылар күбәйҙе, тип, ҡулъяҙмаларында тел-стиль хаталары ебәреүсе бер-ике әҙипте тәнҡит утына тотһа, унан һуң сығыш яһаған поэзия секцияһы рәйесе шағирә Тамара Искәндәрия шиғыр яҙыуҙы кәсепкә әйләндереп алған ҡайһы бер "рифмасылар" күбәйеүе өсөн борсолоуын йәшермәне. Драматургия секцияһы рәйесе Наил Ғәйетбай драматургияның да көрсөк хәлендә булыуын, кисекмәҫтән йәш драматургтарҙы йәлеп итеү саралары талап ителеүен әйтеп үтте. Кандидат шулай уҡ үҙенең һайлау алды программаһы - планлаштырған эштәре менән дә таныштырҙы. Ул йәштәргә, китаптар нәшер итеүгә, яҙыусыларҙың ялын ойоштороуға айырыуса күп иғтибар бүләсәген, Риф Тойғон башлаған эштәрҙе дауам итәсәген вәғәҙәләне. Рәлиф Кинйәбаев менән Игорь Фролов сығыштарында ла ыңғай, өмөт уятырлыҡ һүҙҙәр яңғыраны.

Һайлау һөҙөмтәләренә килгәндә, йәшниккә төшөргән 155 бюллетендең 109-ы - Наил Ғәйетбай, 35-е - Рәлиф Кинйәбаев, 9-ы Игорь Фролов исеменә булыуы асыҡланды. Йәғни, киләһе съезға тиклем идара рәйесе вазифаһын Наил Ғәйетбай атҡарасаҡ.

Беҙ ҡорға Яҙыусылар союзы идараһы рәйесен һайлауға тамаша ҡылыу өсөн генә түгел, ә милләт яҙмышына ыңғай йоғонто яһарлыҡ, ҡайһы бер проблемаларға асыҡлыҡ индерерлек фекерҙәр ишетеү маҡсатында ла килгәйнек. Әҙәбиәттең бөгөнгө торошона ниндәй баһа бирелер - шуны ла көткәйнек. Яҙыусылар союзы ниндәй эштәр атҡарырға тейеш? Идара рәйесенең төп бурысы нимәгә ҡайтып ҡала? Яҙыусымын, тигән яҙыусы ниндәй булырға тейеш? Ошо өс һорауға яуап ишетеү маҡсатында әҙиптәребеҙгә мөрәжәғәт иттек.

**Йыһат СОЛТАНОВ:** Союздың беренсе бурысы - бөтә яҙыусыларға тигеҙ ҡарап, уларҙы бергә туплау. Ни өсөн? Беҙҙең әҙәбиәт үсешһен өсөн. Бының өсөн нимә кәрәк? Яҙыусыларға шарттар тыуҙырыу кәрәк. Беренсе шарт нимә? Яҙыусының китабы сығырға тейеш. Китап сығарыу иң ауыр мәсьәлә хәҙер. Шуның арҡаһында яҙыусының яҙған әйберҙәре, ижады туҡталып тора. Бына шуны Яҙыусылар союзы юлға һалырға тейеш. Хөкүмәтебеҙ менән бергәләп.

Яҙыусы өҙлөкһеҙ белем алырға тейеш. Бер кем дә, белем алып бөттөм, тип әйтә алмай. Шундай ҙур өлкә бит ул - белем. Уның осона сығырлыҡ түгел. Белем алған һайын, кеше лә, уның ижады ла үҫә. Беҙҙә юғары кимәлдәге яҙыусылар бар, әммә яҙыусыларыбыҙҙың яртыһынан күберәгененең белем кимәле уҡыусының белем кимәленән түбәнерәк. Был - әҙәбиәттең үлеме, тигән һүҙ. Уҡыусыны юғары күтәрергә кәрәк. Ә яҙыусыларҙың ҡайһы берҙәре



үҙ әҫәрен уҡыусының аң кимәленә яраҡлаштырып, түбән төшә. Был - ысын яҙыусының эше түгел. Яҙыусы уҡыусыны үҙенең ижады, таланты, бөтә белеме ярҙамында үҙе менән ҡуша юғары күтәрергә тейеш. Ләкин, үкенескә ҡаршы, был һәр ваҡыт улай барып сыҡмай. Бына мин компьютер, интернет менән енел эш итәм. Компьютер менән эш иткән яҙыусылар аҙ һаман. Мин ауылдан сыҡҡан элекке колхозсы. Ауылда ағас күсәрле, ағас тәгәрмәсле көлтә арбаһында шалтырҙашып ултырып йөрөй торғайныҡ. Компьютерһыҙ эш итеү - көлтә арбаһында ултырып йөрөү, ә заман техникаһында түгел. Шуны тоймайҙар, ахыры: компьютер ниндәй еңеллек килтерә бит! Бөтә донъя менән һөйләшеп, мәғлүмәт алып була!

**Ноғман МУСИН, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:** Булып үткән йыйылышта Союздың уставына төҙәтмә индереп, рәйес булып һайланыусының рәйес вазифаһынан тыш, бүтән вазифа биләй алмауы тураһындағы пунктты алып ташларға кәрәк, тигән тәҡдим менән сығыш яһаусылар булды. Кемдер образлы итеп был мәсьәләне "ике ултырғыста ултырыу" тип атаны. Минең ҡарашым шул: рәйес тик ошо вазифаны ғына тейешенсә алып барырға тейеш. Мин Башҡортостан яҙыусыларының 1954 йылда үткән икенсе съезынан башлап бөтә съездарҙа ла ҡатнашҡанмын. Яҙыусылар союзы идараһы рәйесен һайлағанда ике кеше күрһәтелә лә, береһен һайлап ҡуя инек. 2001 йылда үткән 13-сө съезға тиклем бындай ике төрлө ҡараш - ике урында эшләү мәсьәләһе күтәрелмәне. Был юлы ошо төҙәтмәнең индерелмәүе өсөн үҙ фекеремде асыҡтан-асыҡ әйттем һәм күптәрҙе икеле уйҙарынан арындыра алғанмындыр, тип ышанам. Һәр хәлдә, рәйес ике урында ла эшләй ала, тигән тәҡдим үтмәне. Хәҙер беҙҙең Яҙыусылар союзы ҙур - уның ағзаларының һәр береһе үҙен ҙур кеше, айырым эшмәкәр итеп күрә, улар менән эшләүе лә ҡыйын. Унан һуң, хәҙер яҙыусыларҙың иктисади хәле һәйбәт түгел. Йәштәрҙең фатир алыу мәсьәләһе лә хәл итеүҙе талап итә. Юғары ойошмалар менән һөйләшмәйенсә, был проблемаларҙы хәл итеү мөмкин түгел. Яңы рәйестән беҙ шундай эштәр көтәбеҙ...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# ТӨШКӘЙҘӘРЕҢ...

## бик өмөтлө, балам



"Бер һүрәткә ҡарап..." рубрикаһында тәҡдим ителгән икенсе һүрәткә лә гәзит уҡыусыларҙан хаттар килә башланы, шөкөр. Учалы районы Уральск ҡасабаһынан Әлфирә Әлхәмова Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, БР Рәссамдар союзы рәйесе Хәтип Фазыловтың "Төш" тигән һүрәтенә ҡарата үҙ фекерҙәрен шиғри юлға теҙгән. Ул уны, Гөлнур Яҡупованың "Төш юрау" китабындағы юрауҙарға нигеҙләнеп яҙҙым, тигән.

*Яҙмышыңа бәйле хәбәр килә, тыңла, балам:*
*Атта һыбай йөрөү - отош, уңыш, шатлыҡ, ҡыуаныстыр.*
*Һауаланмай барыһын да күтәрә бел, ишет, балам.*
*Телгәнең алдыңа килер, мораҙыңа ирешерһең,*
*Бик күп еңеүҙәргә өлгәшерһең, шатлан, балам.*
*Дан-шөһрәтең артһа, дуҫ күбәйер,*
*Саф күңелле, тоғроларын һайла, балам.*
*Һынауҙарың, ҡаршылыҡтар сығып торһа, ҡурҡма, балам.*
*Көслө рухың, ихтыярың яҡлау булыр, ышан, балам.*
*Тәкәбберлек сифаттарын юя белһәң,*
*Кешелеклек сифаттарын йыя белһәң,*
*Һинең өсөн яуланмаҫлыҡ үрҙәр ҡалмаҫ.*
*Төшкәйҙәрең бик өмөтлө, йоҡла, балам!*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәйге дауам итә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар! Һүрәт буйынса фекерҙәрегеҙҙе ирекле рәүештә (мәҡәлә, һүрәтләмә, бер кәлимә фекер, риүәйәт, нәҫер, хикәйә һ.б) яҙып ебәрә алаһығыҙ. Конкурс эштәрен баһалағанда һүрәттең идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлеген, заман һулышын һынландырыуын ни рәүешле аса алыуығыҙға төп иғтибар йүнәлтеләсәк. Әүҙемерәк булығыҙ, һеҙҙән хаттар көтәбеҙ!**

ЗАУЫҠ

*Риф МИФТАХОВ*

# ХИКМӘТЛЕ ҺҮҘ КҮП БУЛМАЙ

* * *

Ир намыҫы илде ярлы итһәң,
Бөтә байлыҡ булһа зыл-зәбәр.
Һынған ҡылыс менән һелтәнеү ул -
Ир-ат телендәге һүҙ-хәбәр.

* * *

Ҡатын-ҡыҙҙар, гүйә, ҡара урман:
Ҡуйынында күпме сер ята.
Ҡай берәүҙәр унда бәхет таба,
Ҡай берәүҙәр башын юғалта.

* * *

"Оло милләт... Кесе милләт..."
Ундай милләт булмай.
Шулай атаусылар
Олоһон да, кесеһен -
Икеһен дә хурлай.

* * *

Алла итеп һинең исемеңде
Табынырға мең-мең мәртәбә.
Мин барырмын, Мөхәммәтем күреп
Мөхәббәтем, һинең мәккәгә.

* * *

Мөхәббәттә хис-тойғолар таша,
Хатта булмай тотоп тыйырлыҡ.
Тик барыбер ысын мөхәббәттә
Оялыуҙан оло тойғо юҡ.

* * *

Үҙең тапһаң, байлыҡ хеҙмәт итә,
Урлап тапһаң, йоҡо күрмәҫ ҡоло итә.

* * *

Күҙ йәштәре ташты иретһә лә,
Уның менән ағып китмәй бәлә.

* * *

Үҙең тапҡан бәхет булһа,
Осралмай ел-дауыл.

* * *

Нисек табып тормош ҡормаһын,
Ул бай икән - дуҫың булмаһын.

* * *

Икмәк терелтә, баҫтыра аяҡҡа,
Шарап баҫҡанды йыға ян-яҡҡа.

* * *

Кеше сыҙам ҡаты тимер-ҡоростарҙан,
Кеше йомшаҡ серегерәк йомортҡанан.

* * *

Кеше һуҡыр: күҙ-күңеленә ҡорһа пәрҙә,
Ярҙам итмәй яҡтылыҡ та, күҙлектәр ҙә.

* * *

Тут тимерҙе ашай тыштан, эстән
Әҙәм туты, йото -көнсөлләктән.

* * *

Ҡатын-ҡыҙҙан яратылмаған
Ир-ат әле ергә тыумаған.

* * *

Матурлыҡты танып, айыра бел:
Емеш бирмәй һәр бер матур гөл.

* * *

Көстө көс ҡайсаҡ еңә,
Матурлыҡ - бөтәһен дә!

* * *

Мөхәббәтте һорап алмайҙар -
Йөрәк менән генә яулайҙар.

* * *

Мөхәббәттең, бәлки, сере шулдыр:
Аңлауҙа һәм аңлай белмәүҙә.

* * *

Саф намыҫ - әсәйем,
Ә халыҡ - атайым.

* * *

Хурлығы булмаҫ эшенең
Ояла белгән кешенең.

(Аҙағы. Башы 12-15-се һандарҙа).

✓ *Был ҡошсоҡ тәбиғәттә бик һирәк осрай. Ә бына Бөрө яҡтарында борон-борондан ул күпләп көн күрә. Уларҙың гербында төп урынды алған һыу турғайы эш һөйөүсәнлелек менән бергә, эскерһеҙ һәм ихлас булыуҙы ла аңлата.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЛӘМӘТ ҺӘМ...

## бай булыу яҡшыраҡ

■ Ғалимдар раҫлауынса, өлгөлө ғаилә башлыҡтары менән сағыштырғанда, өйләнмәгән ир-егеттәрҙә тестостерон гормоны кимәле юғарыраҡ. Бының ни өсөн шулай икәнлегенә оҙаҡ яуап эҙләгәндәр һәм һөҙөмтәлә орнитологтарҙың күҙәтеүҙәренә таянып, шундай һығымтаға килгәндәр. Баҡтиһәң, оя ҡороу өсөн уңайлы иш тапҡандан һуң, ҡайһы бер ҡоштарҙың тестостерон кимәле шулай уҡ түбәнәйә икән. Ул оя ҡороу, ҡошсоҡтарын ашатыу менән мәшғүл булғанда был гормон кимәле түбән ҡала. Әгәр ҙә яһалма рәүештә тестостеронды күтәрһәң, ата ҡош ирекле тормош башлай: башҡа инә ҡоштарға эйәләшә һәм яйлап ғаиләһен онота. Ғалимдар әйтеүенсә, тәбиғәт быны үҙе яйлаған: ғаиләле ата енестең тестостероны ҡатыны менән мөнәсәбәттәрҙе тотоп тороу өсөн генә етә.

■ Өс йыл буйына баш ватҡандан һуң, испан ғалимдары эттәрҙе йыуа торған машина уйлап тапҡан. Ҡоролма ярты сәғәт буйына эсенә урынлаштырылған хайуанды һабынлай, йыуа һәм киптереп сығара. Бар кер йыуғыс машиналар кеүек, ул эттең ҙурлығы, тоҡомона ҡарап, бер нисә режимда эшләй. Эттең бөрсәләре булһа, машина махсус шампунь ҡуллана, был процедура оҙайлыраҡ ваҡытты ала. Йыуған мәлдә эткә бер юлы гидромассаж яһала. Уйлап табыусылар әйтеүенсә, эттәр бындай йыуыныуҙы яҡшы кисерә, ҡайһыларына ул бик оҡшай. Инженерҙар раҫлауынса, был машина бесәйҙәрҙе йыуыу өсөн дә уңайлы.

■ Ҡытай һәм Япония халҡы араһында таралған ышаныу буйынса, айҙың һәр 4-се көнө бәхетһеҙ. Табиптар был ышаныуҙың кешеләрҙең сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын тикшереп ҡараған. Ике ай буйына 200 мең кешенең үлем сәбәптәрен өйрәнеү күрһәтеүенсә, һәр айҙың 4-се көнөндә үлем осраҡтары йышайыуы асыҡланған. Мәҫәлән, был көндә йөрәк сирҙәре менән үлеүселәр һаны 10 процентҡа күберәк булып сыҡҡан. Бындай статистика Европа халҡы араһында ла күҙәтелә, тик улар өсөн бәхетһеҙ һан 13-сө көнгә тура килә.

■ Банкта асылған ярайһы ҙур ғына иҫәп - хроник ауырыуҙарҙан дауа булып тора. Америка ғалимдары раҫлауынса, аҙ тәьмин ителгән граждандар йәшәгән райондарҙа баш ауыртыуы, депрессия эпидемия характерын ала. Улар фекеренсә, организмға кире хис-тойғолар насар экологик торошҡа ҡарағанда ла зыянлыраҡ. Ҡаҡшаған нервыларҙы нормаға килтереү һәм сәләмәтлекте нығытыу өсөн йәшәү кимәлен 10 процентҡа булһа ла күтәрергә йәки яҡшы кварталға күсеп китергә кәрәк.

■ Нәҫелендә эсәк яман шеше булған кешеләр был хәүефте фолий кислотаһына бай ризыҡтар менән туҡланып түбәнәйтә ала. Америка ғалимдары 90 мең кешене тикшереп, шундай һығымтаға килгән. Улар яман шеш менән ауырымаҫ өсөн көнөнә 400 мг фолий кислотаһы ашарға ҡуша. Был кислота шпинатта, брокколи һәм башҡа төр кәбеҫтәләрҙә, һыйыр бауырында күп. Ғалимдар фекеренсә, фолий кислотаһы ДНК төҙәлешендә ҙур роль уйнай һәм ул етешмәй башлаһа, организм был сиргә тиҙ бирешә башлай.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҺЫУ ТУРҒАЙЫ

**Борон-борондан халыҡ тәбиғәткә һаҡсыл ҡараған. Бындай ҡараш үҙ сағылышын, әйтәйек, гербтарҙа тапҡан. Миҫал өсөн бер нисә районды гербына күҙ һалайыҡ әле. Бына баймаҡтарҙыҡында төп урынды ат алып тора, ә йылайырҙар - боланды, белореттар - бөркөттө, бөрйәндәр - айыуҙы, ейәнсуралар - торнаны, күгәрсендәр, әлбиттә, күгәрсенде, ишембайҙар - ыласынды, мишкәләр - илекте, федоровкалар мышыны үҙ иткән. Ошо гербтар араһында бөрөләрҙеке бик үҙенсәлекле генә. Уларҙың гербында төп урынды һыу турғайы алып тора. Ни өсөн урындағы халыҡ һыу турғайын шул хәтлем яҡын күрә икән - мәҡәлә ошо турала. Әйткәндәй, был ҡошсоҡтоң гербҡа килеп "ҡуныуы" бер бөгөн генә түгел, уның "оя ҡорғанына" ике быуаттан ашыу ваҡыт үткән. Һыу турғайы төшөрөлгән тәүге герб 1782 йылда раҫланған һәм шунан бирле үҙгәрмәй килә!**



Йылға буйында сыҙап торғоһоҙ һыуыҡ. Ниндәй генә елле кейемдәр кейеүгә ҡарамаҫтан, әсе ел үтәнәнүтә өргән һымаҡ. Еле булмаһа, апаруҡ сыҙарлыҡ булай. Әммә ошо еле үҙәккә үткәрә инде. Ҡая-таштың һыуығын һүрән генә яҡтыртҡан ҡыштыҡ ҡояш та бер ҙә генә ыратып йылыта алмай. Шул саҡ иғтибар итә ҡуйҙым - йылға буйында, уйға батып, бер бәләкәй генә ҡошсоҡ ултыра. Кәүҙәһе сама менән сыйырсыҡ-барҡылдаҡ самаһы барҙыр. Ярай, беҙ йылы өйҙә ташлап, балыҡ тотабыҙ, тигән булып (берәү әйтмешләй, ҡотороп) сығып киткәнбеҙ. Ә һинә нимә ҡалған инде! Ваҡытында йылы яҡҡа осоп китергә кәрәк ине, һыуыҡта ошолай шоҡорайып ултырмаҫ инең. Әммә асыу ҡатыш әйтелгән был уйҙарҙы шунда уҡ йәлләү тойғолары алмаштырҙы. Күҙ алдында туңып үлеп ҡуймаһын был, бахырҡай. Исмаһам, үҙемә сауап булыр, тотоп алып йылытайым әле үҙен. Бәлки, алып та ҡайтырмын әле. Тағараҡ эшләрмен, ем һалырмын. Ауыр ҡышты, берәү әйтмешләй, уңышлы үткәрешергә ярҙам итешермен. Йылы яҙ еткәс, урманына осоп китер. Кем белә, бәлки, йәй көндәре балаларын эйәртеп осоп килер ҙә, минең баҡсала һайрап та ултырыр. Белегеҙ, балалар, бына ошо йортта изге күңелле кеше йәшәй, ул ваҡытында мине үлемдән ҡотҡарҙы, ә һеҙ минең хатаны ҡабатламағыҙ, ҡара көҙҙән уҡ тайығыҙ йылы яҡҡа, тип һайраған булыр. Мине, изге кешене күреп, балалары ҡыуаныр, мин урамға сығып баҫһам, сырылдығы сығырҙар...

Ошондай татлы уйҙар менән көрт кисеп, мин ҡошҡай яғына ыңғайланым. Әммә ... ҡошом һыуға сумды ла ҡуйҙы. Бына һинә - мә (берәү әйтмешләй, татлы ҡумәс)! Минең арҡала харап булды бит был ҡошсоҡ. Күҙ алдымда минән ҡурҡып, һыуға сумды ла ҡуйҙы бит. Тик торғанда төҙәтә алмаҫлыҡ хата эшләнем, бугай. Минең арҡала бер йән эйәһенең йәне ҡыйылды!

Ә шулай ҙа минең борсолоуым бушҡа булған икән. Теге ҡошсоҡ һыу турғайы булып сыҡты. Үләм, тип түгел, ә үҙенә аҙыҡ табам, тип сумған икән ул һыуға. Аптырарһың, ошо бәләкәй генә йән эйәһе бына ошондай шартлама һыуыҡ көндәрҙә лә, һыуға сумып, шунда үҙенә аҙыҡ табып көн күрә, имеш.

Булмаһа, һыу турғайы менән яҡындан танышайыҡ әле. Уның тән төҙөлеше тулыһынса һыуға сумырға яраҡлашҡан, шуға күрә ул башҡа турғайҙарҙан күпкә айырылып тора. Беренсенән, уның йөндәре һәр ваҡыт майланып тора. Был яҡтан ул өйрәк-ҡаҙға ла оҡшап ҡуя. Май биҙҙәре бүлеп сығарған шыйыҡса уны һыуыҡтан яҡшы һаҡлай. Икенсенән, һыу турғайының ҡойроғо ҡупҡа ҡыҫҡа. Ысынлап та, оҙон ҡойроҡ осоуға ғына шәп, ә бына уның менән һыуҙа һистә шәп йөҙөп булмай, ул бары ҡамасаулай ғына. Өсөнсөнән, был турғайҙың аяҡ-тырнаҡтары бик көслө. Улар һыу төбөндәге таштарға тотоноп йөрөү өсөн кәрәк. Ысынлап та, быуындар көсһөҙ булһа, тулҡын һине шунда уҡ әйләндереп ташлар ине.

Әйткәндәй, һыу турғайы торғон һыуҙа көн күрә алмай. Уға һәр ваҡыт көслө ағым кәрәк. Әммә ул һыуҙа балыҡ һымаҡ йөҙөп йөрөмәй, ә йылға төбөнән атлап йөрөй. Һыуға сумғанда ҡанаттарын кәүҙәһенә ҡыҫа һәм бер аҙҙан уларҙы яҙа. Ошо мәлдән башлап уның ғүмере уның оҫталығына бәйле. Ул ҡанаттарын төрлө мөйөштә һыу тулҡынына ҡаршы ҡуйып, йылға төбөнә лә ҡыҫылмай, арҡаға ла ҡоламай, шул уҡ ваҡытта өҫкә лә атылып сыҡмай, һыу төбөндә атлап йөрөй. Ә үҙе көслө тәпәйҙәре менән таштарҙы аҡтарып, үҙенә аҙыҡ эҙләй. Торғаны менән мөғжизә инде. Сумыу буйынса беҙҙә алдынғылыҡты бирмәҫ ине был ҡошсоҡ. Һыу турғайы бер сумғанда 20 секундҡа тиклем тын алмай 20 метрға хәтлем ара үтә ала. Тәрәнгә лә сума икән ул, сумыу тәрәнлеге метр ярымға етеүе бар. Һыу өҫтөнә сығыр мәл етһә, ҡанаттарын ағымға шундай оҫта ҡуя, хатта ул һыу өҫтөнә атылып килеп сыға. Күп осраҡта кеше был мәлде күрмәй ҙә ҡала. Әле ҡараһаң, бер кем дә юҡ, әле ҡараһаң, боҙ өҫтөндә һыу турғайы ултыра.

Шуныһы ҡыҙыҡ, башҡа ҡоштарҙан айырмалы, һыу турғайының атаһы һәм инәһе араһында айырма бөтөнләйе менән юҡ. Был әлеге лә баяғы һыуға сумыу менән бәйле. Яҙ етеү менән улар парлашалар һәм оя ҡора башлайҙар. Оя күп осраҡта тупҡа оҡшап тора. Уның тышын эшләгәндә материалды күберәк һыу төбөнән (ылымыҡ, үлән) йыялар. Шулай ҙа ярҙағы үҫемлектәрҙе лә алыуҙары бар. Әммә уларҙы барыбер һыуға манып сылатып алалар. Ә ояның эсен ҡоро япраҡ-үләндән эшләйҙәр. Инә ҡошсоҡ бер һалғанда дүрт-ете йомортҡа һала. Әммә икеһе лә оҡшаш булғас, инә менән ата ҡош алмашлап баҫалар микән, быны белеп булмай. 15-17 көндән ояла йәш ҡошсоҡтар сырылдаша башлай. Сама менән өс аҙна үткәс, йәштәр төп ояны ташлай һәм үҙаллы көн күрә башлайҙар. Әммә һыу турғайҙары бер төркөм булып йәшәргә тырышмай, айырым йәшәүҙе хуп күрәләр. Яҡынса ике саҡырым ара бер ғаиләнеке булып иҫәпләнә. Улар башҡаларҙы ошо ергә индермәҫкә тырыша. Шуныһы ихтирамға лайыҡ - һыу турғайы үҙ төйәген бер ҡасан да ташламай, йыл әйләнәһенә үҙ иткән йылға буйында көн күрә.

Әле бына шуны уйлап ултырам. Ошондай матур ҡошсоҡто бөрөләр бер ҙә бушҡа ғына һайламаған икән. Әйткәндәй, был ҡошсоҡ тәбиғәттә бик һирәк осрай, сөнки ул бөтә ерҙә лә үҙ итмәй, яңы урында ерегеп йәшәп китә алмай. Ә бына Бөрө яҡтарында борон-борондан ул күпләп көн күрә. Уларҙың гербында төп урынды алған һыу турғайы эш һөйөүсәнлелек менән бергә, эскерһеҙ һәм ихлас булыуҙы ла аңлата. Ә инде беҙ үҙ сиратыбыҙҙа тәбиғәтте һаҡлайыҡ, урман-һыуҙарыбыҙ таҙа булһын, ошондай мөғжизәле йән эйәләре беҙҙең төбәкте бер ҡасан да ташламаһын!

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**
**Бөрйән районы.**

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Әбйәлилдә Ағинәйҙәр ҡоро төҙөлә башлауы хаҡында һүҙ сыҡһа, күптәр: "Бәй, беҙҙә ул электән бар түгелме һуң?" - тип аптырап ҡала. Әлбиттә, Әбйәлил булһын да, нисек ағинәйҙәрһеҙ булһын инде! Тик беҙҙә башлыса сәсәниәләрҙе "ағинәйҙәр" тип йөрөттөләр. Район, билдәле булыуынса, сәсәнлек мәктәбе менән дан тота. Хәнифә Әбүбәкерова менән Вәсилә Садиҡова - бөтә республикаға билдәле һүҙ оҫталары. Шулай уҡ Гөлнур Мамлеева, Мәфтуха Мусина, Вазифа Хәйретдинова, Мәүҙиға Баймөхәмәтова, Фатима Һибәтова, Әсмә Солтанова, Флүрә Низамова, Айһылыу Хәсәнова, Сәфинә Солтанова, Ләлә Ғүмәрова, Фәүкинур Сафина һәм башҡа бик-бик күптәр үҙҙәренең шиғри юлдарға һалынған аҡ һүҙҙәре, өгөт-нәсихәттәре менән элек-электән халыҡ араһында тәрбиәүи эш алып барҙы.**

# АУЫЛ ТОРМОШОНДАҒЫ БУШЛЫҠТЫ...

## ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар тултыра

Ә рәсми рәүештә Ағинәйҙәр ҡоро беҙҙә былтырғы йыйында ойошторолдо. Ҡорҙоң етәксеһе итеп Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, китапханалар эше ветераны Роза Таһирова һайланды. Шунда уҡ ун биш ауыл биләмәһенең дә Ағинәйҙәр ҡоро төҙөлөп, уларҙың етәкселәре һайланды, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ғаилә, әсәлек, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе Гөлфиә Янбаева уларға танытмалар тапшырҙы, ә район хакимиәтенең аналитика бүлеге етәксеһе Лениза Сәғәҙиева символик аҡ яулыҡтар ябындырҙы. Шул көндән алып Роза Вәли ҡыҙы райондың ун биш ауыл биләмәһендә Ағинәйҙәр ҡорҙары эшен әүҙемләштереүгә ең һыҙғанып тотоноп китте. Был эш бер ниндәй ҙә өҫтән баҫымһыҙ, күтәренке рух менән ойошҡан рәүештә бара. Илле-алтмыш-етмеш йәшлек ханымдарҙың өйҙә ултырмай, кеше араһында булғыһы килә, әле эшкә дәрттәре лә һүнеп бөтмәгән. Шуға ундайҙар үҙҙәре теләк белдереп, ағинәйҙәр сафында булырға ынтылып тора.

-Ҡайһы берәүҙәр ағинәй мотлаҡ аҡ яулыҡты яҙып ябынған, намаҙ уҡыған, дин тотҡан әбей булырға тейеш, тип уйлай. Әлбиттә, улар ағинәй. Тик беҙ ойошмаға ҡырҡ, илле йәшлек ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ла саҡырабыҙ, - ти ҡор етәксеһе Роза Таһирова. - Иң мөһиме, был ҡатындар ире, ҡәйнәһе, күршеләре менән татыу йәшәгән, өлгөлө балалар үҫтергән, эшендә абруй менән файҙаланған, белемле, әүҙем һәм милли рухлы кешеләр булһын. Матур кейенеп, үҙенде тәрбиәләп йөрөү бик мөһим. "Башта үҙеңде бел әле" тип бармаҡ менән төртһәләр, ундай инәйҙән ниндәй тәрбиәсе сыҡһын?..

Роза Таһирова урындағы биләмә башлыҡтарынан Ағинәйҙәр ҡоро өсөн эш бүлмәһе булдырыуҙы ла талап итә, әле Таштимер, Хәлил биләмәләрендә был талапты үтәп, ағинәйҙәргә махсус йыйылыу урыны бүленгән.

- Уҡытыусы-ветеран Әсмә Тайыпова етәкселегендә таштимерҙәр ойошҡан эшләй, буйҙаҡтарға иштәрен табырға ярҙам итеүҙе үҙҙәренә төп йүнәлеш итеп һайлаған, - ти Роза Вәли ҡыҙы. Ул шулай уҡ Асҡар (етәксеһе Сафия Мансурова), Амангилде (етәксеһе Ләлә Ғүмәрова), Хәлил (Сәүҙә Ғәбитова), Ҡужан (Фәйрүзә Кәримова), Әлмөхәмәт (Мәҙинә Ғүмәрова) һәм Дәүләт (Фая Ҡаһарманова) ауылдарының ағинәйҙәр ойошмаларының яҡшы эшләүен билдәләне. Тәжрибә уртаҡлашыу маҡсатында әбйәлилдәр Сибай Ағинәйҙәр ҡорона ла барып ҡайтты, улар үҙҙәре Әбйәлилгә килде.

Амангилде биләмәһе ағинәйҙәре "Халҡымдың боронғо кәсептәре" тип аталған республика сараһы әҙерләй башлаған. Улар башҡа яҡтарҙа инде онотолған тула һуғыу кәсебен күрһәтергә йыйына. Әле күптән түгел Амангилде биләмәһенә ҡараған Ҡаҙмаш ауылындағы ағинәйҙәр урындағы клуб мөдире Разия Ғиззәтова менән берлектә "Өләсәйем һандығы" тип аталған ололар, йәштәр һәм балалар ҡатнашлығындағы быуындар осрашыуын юғары кимәлдә үткәрҙе. "Ғөмүмән, Ҡаҙмаш ойошмаһын етәкләгән уҡытыусы-ветеран Сәрбиямал Рәжәпова инициатива һәм әүҙемлек менән айырылып тора, - ти Амангилде Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Ләлә Ғүмәрова. - Ул һәр өлкә - мәҙәниәт, спорт, йәштәр эштәре буйынса яуаплы кешеләр тәғәйенләгән. Хәҙер ауылда бер сара ла ағинәйҙәрҙән тыш үтмәй..."

"Өләсәйем һандығы" кисәһендә Үтәгән, Рысҡужа, Амангилде, Әбделғәзе ауылдары ағинәйҙәре лә ҡатнашты. Бына ҡайҙа тормош һабаҡтары! Халыҡ хәтере - бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазина бит ул. Өләсәйҙәрҙең мәҡәлдәренә, йомаҡтарына, таҡмаҡтарына һәм әкиәттәренә күпме аҡыл, йәшәү мәғәнәһе һыйған. Уларҙы тыңлап, сисеп, арттарынан һамаҡлап, бала күңеле һәм аңы үҙенә күпме тәрбиә һәм һабаҡ алды. Кисә барыһына ла оҡшаны: уны башҡа ауылдарҙа ла үткәрергә ҡарар иттеләр, ә эстафетаны үтәгәндәр алды.

Әбйәлил Ағинәйҙәр ҡоро үҙҙәренең эшмәкәрлек төрҙәрен киң йәйелдермәксе. Роза Таһирова әйтеүенсә, ағинәйҙәр аҡрынлап дини йолаларҙы ла өйрәнә, намаҙға баҫа. Ғаиләнең ролен күтәреү, айырыуса атай, ир-ат абруйын үҫтереү буйынса ла бик күп тәрбиә саралары планлаштыра. Эскелеккә ҡаршы көрәшеү, ауылдарҙы "Айыҡ ауыл" конкурстарында ҡатнашыуға ҡыҙыҡтырыу, экологик өмәләрҙе әүҙемләштереү, ғөмүмән, һәр кемдә ошо ерҙең хужаһы булыу тойғоһон уятыу өсөн тырышыуҙары ағинәйҙәрҙең. Был ҡорҙар ауылдарыбыҙ тормошондағы һуңғы йылдарҙа барлыҡҡа килгән бушлыҡты тултырыу сараһы һымаҡ ҡабул ителә хәҙер - бына шуныһы иң мөһиме.

**Рәхимә МУСИНА.**



Әбйәлил районы ағинәйҙәре.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Әгәр төплө булһағыҙ, кешеләр һеҙгә ылығыр

**Уйланырға мәжбүр итергә тейешле һорауҙар.** Ябай булмаған эш башҡарырға тура килгәндә психологик көйләнешегеҙ ниндәй? Барлыҡ эштәргә лә энтузиазм менән тотонаһығыҙмы һәм уларҙы иң юғары кимәлдә башҡараһығыҙмы? Әллә эшегеҙҙең нисек булһа ла башҡарылыуы менән генә сикләнергә тура киләме?

**Әгәр кемгәлер юғары компетентлыҡ хас икәнен уйлап ҡараһаҡ, ысынбарлыҡта һүҙ бары тик өс төр кеше хаҡында бара:**

- Ниндәй ихтыяж тыуыуын күрергә һәләтлеләр.
- Ихтыяждарҙы тыуҙырыусылар.
- Билдәле хәл-ваҡиғаларҙы улар ысынлап та мөһим булған саҡта тыуҙырыусылар.

Һөнәри эшмәкәрлегегеҙгә күҙ һалғанда, ниндәй өлкәлә даими рәүештә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшәһегеҙ? Һеҙ кем: фекерләүсе аҡыл эйәһеме, эшмәкәрме йәки ышаныслы уйынсымы? Шәхес булараҡ ни тиклем яҡшы булһағыҙ, башҡаларға йоғонто яһарлыҡ потенциалығыҙ шул тиклем күберәк буласаҡ.

**Өйгә эш**

**Компетентлығығыҙҙы арттырыу өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

- Эшкә башкөлләй бирелегеҙ. Әгәр унан аҡыл һәм хис-тойғолар йоғонтоһонда нисектер тайпылған булһағыҙ, ҡабаттан башкөлләй сумығыҙ. Беренсенән, тулыһынса үҙегеҙҙе эшегеҙгә бағышларға ҡабаттан ҡарар ҡылығыҙ. Үҙегеҙгә эшегеҙ талап иткән мөһим ваҡытығыҙҙы һәм иғтибарығыҙҙы бүлергә вәғәҙә бирегеҙ. Икенсенән, нилектән эшегеҙҙән ситләшеүегеҙҙең сәбәптәрен асыҡларға тырышығыҙ. Проблема тыуҙырыусы сығанаҡты табығыҙ һәм уны йырып сығыу планын төҙөгөҙ.
- Юғары талаптар ҡуйығыҙ. Әгәр даими рәүештә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшергә тура килмәй икән, шәхси стандарттарығыҙҙы ҡабаттан ҡарап, планкағыҙҙы юғарыраҡ күтәрегеҙ. Үҙегеҙҙе түбән баһаламайһығыҙмы? Мөйөштәрҙе киҫеп үтмәйһегеҙме? Әгәр шулай икән, башығыҙҙа быға тиклем булған программаны алып ташлап, алдығыҙға яңы, юғарыраҡ талаптар ҡуйығыҙ.
- Күрһәткестәрегеҙҙе яҡшыртыуҙың өс ысулын табығыҙ. Бер кем дә ошо йүнәлештә маҡсатлы шөғөлләнмәй тороп, яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшмәй. Һөнәри оҫталығығыҙҙы күтәреү мөмкинлеге биргән өс мөмкинлекте табыу өсөн бәләкәй генә тикшеренеү уҙғарығыҙ. Һуңынан уны ғәмәлдә ҡулланыуға ваҡыт һәм аҡса табығыҙ.



## 21 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Кураж". Биографический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.15 "Скандальный дневник". Драматический триллер (18+).
03.00 Новости.
03.05 "В наше время" (12+).
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.50.**
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Драматический сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский-3". Мелодраматический сериал. 13-15 серии (12+).
23.50 "От Петра до Николая. Традиции русских полков" (12+).
00.45 "Девчата" (16+).
01.30 "Большая перемена".
02.50 "Взорвать СССР. Ядерный апокалипсис" (12+).
04.00 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Редик Фәсхетдинов(6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". Әбдрәхим Исҡужин
15.00 "Рампа" (6+)
18.00 "Еңмеш". Фильм (0+)
21.00 "Кис ултырып". Азалия һәм Урал Рәшитовтар (12+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели (16+).**
**14.30, 22.30, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Көндәлек" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
